✓ ***Башҡортмон, тиһәң, ҡыланма, донъя кендеге һымаҡ! Башҡорт маҡтаныуҙы һөймәй, башҡорт ғүмергә тыйнаҡ. Күкрәк ҡағырҙан элек, яуап бир Баш йортоңа: Алғандарыңды беләбеҙ - Ни бирҙең башҡортоңа!***

***Шәриф БИКҠОЛ.***


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

13 - 19 ОКТЯБРЬ (ҠАРАСАЙ) 2012 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№41 (511)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


### Кешене бәхет айыра



3

### Салауат проспектында...

Салауатҡа һәйкәл



5

### Туған телдә...



8-10 туған тел уҡытыусыһы ғына яҡларға тейешме?

### Тамашасыны уйландырыу -

быны был бурыс, исмаһам!



13

14 ТВ-программа


ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Көнсығыш халҡында, үҙгәрештәр осоронда йәшәргә яҙһын һиңә, тип теләү насар тонды, рәнйеште аңлата, тиһәләр ҙә, шундай осорҙа йәшәү беҙгә лә тәтене. Ә һеҙ шул заман хаҡында әле ниҙәр әйтер инегеҙ?

***Рәшит ШӘКУР , яҙыусы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, БДПУ профессоры:*** Үҙгәртеп ҡороуҙар осоро, республикабыҙҙың үҙаллылыҡ яулауы беҙҙең өсөн генә түгел, бөтә ил күләмендә ҙур тарихи әһәмиәткә эйә булды. Юғалтыуҙарыбыҙ ҙа, табыштарыбыҙ ҙа бергә килде. Яҙғы ташҡында һыу менән сүп-сар ҙа аға, ер таҙарып китә бит. Беҙҙең өсөн, республика халҡы өсөн күп яғы менән был үҙебеҙҙең күптәнге хыялдарҙы, өмөттәрҙе көн тәртибенә ҡуйып, нимәгәлер өлгәшеү дәүере лә булды. Ельцин власҡа ынтылып, байҙар ҡатламын барлыҡҡа килтереү маҡсатында ил байлығын үҙләштереүгә, үҙ-ара таратып алып бөтөүгә киң юл асты, ә ябай халыҡ ярлылыҡтың сигенә еткерелде. Шул уҡ ваҡытта беҙгә лә бер "өлөш" сығарып тынысландырырға иттеме - күпме "йота" алабыҙ, шунса суверенитет бирергә мәжбүр булды. Бының менән милли республикалар үҙ хоҡуҡтарын киңәйтеү, алған табыштарын үҙәккә генә ебәреү урынына үҙенә ҡалдырыу мөмкинлеге алды. Шул уҡ хоҡуҡтар беҙҙең республиканы сәйәси, иҡтисади яҡтан да бер баҫҡысҡа күтәрергә мөмкинлек бирҙе. Был элекке матрешка эсендәге автономия түгел ине инде, беҙ суверенлы республика статусына өлгәштек. Ул дәүерҙә беҙ телде, мәҙәниәтебеҙҙе, үҙаллы тормошобоҙҙо яҡлау өсөн киңерәк мөмкинлектәр алдыҡ. Оҙағыраҡҡа һуҙылһа ла, дәүләт теле статусы алыу башҡорт теле өсөн мөһим бер ваҡиға ине, республикала йәшәгән халыҡтарҙың бындай үҙаллылыҡтың кәрәклегенә инаныуы ла мөһим булды. Үҙаллылыҡҡа хоҡуҡтарҙы халыҡ-ара нормаларға таянып аңлатырға йәмәғәтселек тә өлгөрөп етте. Республиканың үҙ Президенты вазифаһын, үҙенең атрибуттарын - гимны, гербы һәм флагын булдырыу ошо үҙаллылыҡты рәсми таныу булды.

Әлбиттә, ошо ваҡиғаларҙың эсендә ҡайнап, йәмәғәтселек эштәрендә ҡатнашып йөрөгән кеше булараҡ, минең өсөн был заман алһыҙ-ялһыҙ эш осоро ине. Әле яңыраҡ ҡына гәзиттә кемдер берәүҙең, 90-сы йылдарҙа "Урал" башҡорт халыҡ үҙәге көн һайын ултырыштар үткәрә ине, тип хәтерләүен уҡыным. Дөрөҫтө яҙалар, ысынлап та шулай булды. "Урал" башҡорт халыҡ үҙәгендә көн һайын, бер тин түләүһеҙ, туҙып, хәлдән тайғансы эшләргә тура килде. Өҫтәүенә, ижад итә торған шәхси ваҡытым менән дә иҫәпләшеп тороп булманы. Ярай әле, институтта өлкән ғилми хеҙмәткәр булараҡ, бәләкәй генә эш хаҡы ала инем. Реформалар дәүере һаман да дауам итә. Улар иһә йәмәғәтселекте һәр ваҡыт эшкә егеп тотоуға әйләнде. Әлбиттә, уларҙың күбеһе уңышһыҙ ҙа килеп сыҡҡылай, халыҡ борсола башлай, ләкин туранан-тура власҡа мөрәжәғәт итә алмай, шуға күрә лә уларҙың ихтыяждарын йәмәғәт ойошмалары аша власть иғтибарына еткерергә тура килә. Ә бының өсөн проблемаларҙы өйрәнергә, нигеҙләргә, һәр төрлө документтар менән дәлилләп, ҡайтанан эшләргә тура килә. Әйтеүемсә, ҡайһы саҡ был тырышлыҡтар бушҡа сығып та ҡуя, ләкин ситтән генә битараф күҙәтеп ятҡансы, һаман да йәмәғәтселек эштәрендә ҡатнашыуыма бик шатмын.


**(Дауамы 2-се биттә).**




ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Көнсығыш халҡында, үҙгәрештәр осоронда йәшәргә яҙһын һиңә, тип теләү насар тонды, рәнйеште аңлата, тиһәләр ҙә, шундай осорҙа йәшәү беҙгә лә тәтене. Ә һеҙ шул заман хаҡында әле ниҙәр әйтер инегеҙ?

(Башы 1-се биттә).

***Ғәлинур ҠАЛМУРЗИН, 1997-2011 йылдарҙа Ғафури районы башҡорттары королтайы башҡарма комитеты рәйесе, БР-ҙың атҡаҙанған мәғариф хеҙмәткәре:*** Беҙҙең ерлектә үҙгәреш осоронда йәшәү, киреһенсә, бәхет кенә булды. Әлбиттә, проблемалар, билдәле бер ҡыйынлыҡтар ҙа йәнәш килде, ләкин улары , рухи яңырыш һәм күтәрелеш мәле менән сағыштырғанда, сүп кенә һымаҡ ине. Үҙгәреш осорона тиклем дә, унан һуң да беҙҙең халыҡтың башҡаса шундайын да берҙәм, ойошҡан сағын күрергә насип булманы... Күрәһең, халҡыбыҙҙың күңеле шул тиклем үҙгәрештәргә һыуһаған, тамырҙарында аҡҡан ҡандың ҡайнап, тулышҡан мәле булған. Ҡыҫҡа ваҡытлы бер балҡыш ҡына булып алды ул мәл, үкенескә ҡаршы, ташҡын кире ярҙарына ҡайтты. Уйлап ҡараһаң, халыҡ тормошо гел генә балҡыштарҙан да торорға тейеш түгелдер инде, ә шулай ҙа ғүмер буйы балҡып, ялҡынланып йәшәгән халыҡтар ҙа бар бит донъяла. Уның ҡарауы, бындай халыҡ үҙе менән иҫәпләшмәүгә, үҙ өҫтөнән "тәжрибәләр" үткәреүгә, кадрҙарын әләф-тәләфләүгә, әсә телен өйрәнеүҙе тыйыуға бер ҡасан да юл ҡуймаясаҡ.

Республикабыҙға үҙаллылыҡ яулап алған ул шанлы көндәрҙән һуң 22 йыл үҙып та китте. Шул йылдарҙа тыуған балалар бөгөн балиғ йәшен үтеп, үҙ аллы тормошҡа аяҡ баҫты. Күңелемде шундай һорау борсой: үҙгәртеп ҡороу йылдары биргән һабаҡтар тураһында беләме улар? Ниҙәр беләү? Мин ышанам: халҡыбыҙ яҙмышында тағы ла сағыулыраҡ балҡыштар булыр әле, тик әлегеһен һаҡлап ҡалырға, йәштәребеҙ күңеленә хәҡиҡәт орлоҡтарын сәсеп ҡалдырырға кәрәк.

***Таңһылыу ҠАРАМЫШЕВА, шағирә, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Рәми Ғарипов премияһы лауреаты:*** Үҙгәрештәр - тормош нигеҙе. Барса нәмә һәр ваҡыт үҙгәреүгә дусар. Үҙгәрмәһә, торғонлоҡ башлана. Был да һәйбәт күренеш түгел. 21-се быуат - мәғлүмәт заманында - үҙгәрештәр тағы ла етеҙерәк барасаҡ. Үҙгәрештәрҙән ҡурҡырға түгел, уларға әҙер булырға кәрәк, сөнки үҙгәрештәр һәр ваҡыт ил сәйәсәтендә һәм иҡтисадында килеп тыуған көрсөктәргә бәйле, тип уйлайым. Әйткәндәй, япон телендә "көрсөк" һүҙе бер юлы ике төшөнсәне: хәүеф һәм яңы мөмкинлек тигәнде үҙ эсенә ала икән. Эйе, беҙ бөгөн хәүефле, әммә кешегә яңы мөмкинлектәр биргән заманда йәшәйбеҙ.

90-сы йылдарҙа башланған үҙгәртеп ҡороуҙарҙы шәхсән мин бик ҡыуанып ҡабул иткәйнем. Ул саҡта мин "Йәшлек" гәзитендә мөхәррир урынбаҫары булып эшләй инем. Билдәлелек, һүҙ азатлығы тигән нәмәнең барса ләззәтен татыған мәл, дөрөҫлөктө халыҡҡа еткереү мөмкинлегенән күңелемдең көслө илһамын тойған ғәжәп бәхетле йылдарым. Ошо үҙгәртеп ҡороуҙар һөҙөмтәһендә 1917 йылда большевиктар бер һелтәүҙә юҡҡа сығарған шәхси милек йәшәүгә хоҡуҡ алды, сәйәси золомдарға сик ҡуйылды, бер власлылыҡ, бер фирҡәлелек системаһы бөтөрөлдө. Йәмғиәттәге был трансформация ниндәйҙер кимәлдәге демократия шарттарында ғына мөмкин булды. Әммә үҙгәрештәр мәлендә йәмғиәткә хәүефтәр ҙә янаусан. Иҫебеҙгә төшөрәйек: шул уҡ 17-се йылғы революциянан һуң башланған граждандар һуғышы, 21-се йот йылдары, 30-сы йылдарҙағы репрессиялар күпме милләттәштәребеҙҙең ғүмерен өҙҙө, башҡорт халҡы йөҙәрләгән меңләп йән иҫәбен юғалтты, яртылаш тиерлек ҡырылды. Башҡорттарға ҡарата тотош 18-се быуат буйы һәм граждандар һуғышы осоронда геноцид сәйәсәте үткәрелһә, артабан улар этноцид ҡорбандарына әүерелде, йәғни уларҙан да "совет халҡы" тигән милләт яһарға тырыштылар. Демографик хәлебеҙ бер өҙлөкһөҙ алып барылған ассимиляция арҡаһында ла насарайҙы. Был өлкәлә әлеге көндә лә кире үҙгәрештәр бара. Үкенес, тарих ҡабатлана, сөнки һәр дәүләт үҙенең асылы буйынса тоталитар. Унан мәсьәләбеҙҙең хәл ителеүен көтөү мәғәнәһеҙлек. Һуңғы йылдар эсендә беҙ бөтәбеҙ ҙә демократия тигән нәмәнең ике яҡлы булып сығыуына шаһит булдыҡ. Уны күптәр үҙ файҙаһына уҫал маҡсатта файҙаланды. Демократияны урлашыуға, коррупцияға, кешеләрҙең шәхесен мыҫҡыллауға, унан да яманы - бөтөн халыҡтарҙың иркен танымауға бирелгән азатлыҡ тип ҡабул иттеләр. В. Жириновский кеүек сәйәсмәндәрҙең асыҡтан-асыҡ Рәсәй федерализмын ҡаҡшатыуға, унитар дәүләт төҙөүгә йүнәлтелгән сәйәсәте тормошҡа аша бара. Республикабыҙ сиктәрендә лә яуланған азатлыҡтарыбыҙ юғала бара. Суверенитет ғәмәлдә юҡҡа сығарылды. Башҡорт теле иҫәбенә 4-се кластарҙа дин дәрестәре инә, оптималләштереү һылтауы менән ауылдарҙа әллә күпме милли мәктәптәр ябылды, милли мәғариф буйынса директор урынбаҫары вазифалары бөтөрөлдө... Был кире күренештәр милләттәштәремдең аңлы өлөшөн ныҡ борсоуға һала, шул иҫәптән мине лә! Ыңғай үҙгәрештәр генә дауам итһен ине лә бит, юҡ шул. Тарих ҡабатлана...

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!



Өфө ҡалаһы Калинин районының башҡорт теле уҡытыусылары.

**Гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһының тағы бер миҙгеле етте. Ул баҫмабыҙҙың киң мәғлүмәт саралары баҙарындағы урынын, тотороҡлолоғон билдәләүсе, шулай уҡ уҡыусыларыбыҙҙың тоғролоғон, ихтирамын, хатта аңлылыҡ, рухлылыҡ кимәлен дә күрһәтеүсе мәл, тип баһалана.**

● 2013 йылдың тәүге яртыһына **50665 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә 360 һум 24 тингә яҙылырға була.** Октябрҙә гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәреүсе 4 уҡыусыбыҙға - М. Әхтәмовтың **"Башҡорт халыҡ мәкәлдәре һәм әйтемдәре"**, 10 уҡыусыға - Рауфан Мортазиндың **"Космоэнергетика һәм сәләмәтлек"**, 10 уҡыусыға - **"Айыҡ туй сценарийҙары"**, 10 уҡыусыға Әхмәр Үтәбайҙың **"Мин айыҡ тормош башланым"** китаптарын бүләк итәсәкбеҙ.

● Ә кемде бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә **тыуған көндәрен** хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

● **"Киске Өфө" - бүләгем"** акцияһы ла дауам итә. Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, атай-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**, беҙҙең электрон почта: **info@kiskeufa.ru**, беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов Кореяның Университетта белем алыу буйынса советының генераль секретары Дэ Джун Хван менән осрашты. Һүҙ Башҡортостандағы юғары уҡыу йорттарының белем биреү системаларына ситтән тороп уҡытыу технологияларын индереү мөмкинлектәре хаҡында барҙы. Ситтән тороп, йәки электрон белем алыу студенттарға уҡытыусылар менән интернет аша аралашып, аудиторияларға бармайынса ғына уҡырға мөмкинлек бирәсәк.

✓ Башҡортостан Президенты Указы менән республиканың мәҙәниәт министры итеп Әминә Шафиҡова тәғәйенләнде. Әминә Ивнәй ҡыҙы Шафиҡова 1974 йылдың 24 мартында Бөрйән районының Ырғыҙлы ауылында тыуған. 2010 йылдан Әминә Ивнәй ҡыҙы З.Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт академияһының ректоры булып эшләгәйне.

✓ Башҡортостандың Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе Константин Толкачев Төркиә Республикаһының Ҡаҙандағы Генераль консуллығы делегацияһы менән артабанғы иҡтисади һәм мәҙәни хеҙмәттәшлек мәсьәләләрен тикшерҙе. Осрашыуҙа республикала үтәсәк мөһим ваҡиғалар хаҡында ла һүҙ барҙы. Улар иҫәбендә - 13 октябрҙә үтәсәк Рәсәй мөфтөйҙәре съезы. Константин Толкачев Өфөлә Төркиә Республикаһының вәкиллеген булдырыу тураһында фекерен белдерҙе. Быға Төркиә Республикаһының генераль консулы Сабри Тунч Ангылы, әлеге ваҡытта республика почетлы консул институтын булдырыу мәсьәләһе ҡарала һәм лайыҡлы кандидаттар һайлана, тип яуап бирҙе.

✓ Башҡортостан баш ҡалаһына визит менән Ҡытай Халыҡ Республикаһының Шэньян ҡалаһы делегацияһы килде. Ике көнлөк визит Өфө һәм Шэньян ҡалалары араһында туғанлыҡ мөнәсәбәттәрен булдырыу тураһындағы килешеүҙе тормошҡа ашырыу буйынса саралар сиктәрендә ойошторола. Визит барышында Шэньянға арналған фотокүргәҙмә ойоштороу планлаштырыла.

✓ Өфөлә ҙур халыҡ-ара саралар үтәсәк. Декабрҙә - йәштәр араһында хоккей буйынса донъя чемпионаты, киләһе йылда Ҡышҡы халыҡ-ара балалар уйындары, 2015 йылда Шанхай хеҙмәттәшлек ойошмаһы һәм БРИКС илдәре башлыҡтарының саммиттары үтәсәк. Бынан тыш, Өфө ете меңгә яҡын спортсы ҡатнашлығындағы Бөтә донъя уйындарын үткәреү буйынса 2021 йылға ғариза биреү кампанияһында ҡатнашасаҡ.

*МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ*

# КЕШЕНЕ БӘХЕТ АЙЫРА

**Бик парадоксаль әйтем. Ысынлап та, кешене кешенән бәхет айырамы икән? Нимә генә тимә, һәр кем донъяла йәшәүенең төп мәғәнәһен, маҡсатын бәхетле булыуҙа күрә һәм үҙенең һәр ғәмәли ынтылышын бәхет пирамидаһы ҡороуға йүнәлтә. Ҡыҫҡаһы, кешене бәхеткә ынтылыш йәшәтә, маҡсатлы итә. Шулай булғас, әйтемдә килтерелгәнсә, ни өсөн кешеләрҙе фәҡәт бәхет айыра икән һуң? Кешене кешенән айырыр булғас, бәхеткә ынтылыуҙан ни фәтеүә? Кешеләрҙең бер-береһенән алыҫлашыуына, айырылышыуына, ғаиләләрҙең тарҡалыуына бәхет пирамидаһының түбәһе булып иҫәпләнгән "Америка хыялы"на барып етеү ҙә тотҡарлыҡ була алмаймы икән ни? Айырылышыуҙар буйынса был ил донъяла беренсе урында тора. Шул уҡ йәшәү уңайлыҡтары, комфорт йәһәтенән дә Америкаға еткән ил юҡ. Дөрөҫөрәге, юҡ ине, сөнки бар донъяны ялмаған иҡтисади көрсөк тап ошо дәүләттән башланды, улай ғына ла түгел, "Америка хыялы"на артыҡ ашҡынып ынтылыуҙан башланды. Һәр хәлдә, сәйәсмәндәр был илдә башланған иҡтисади көрсөктө тап ошонда күрә.**







Әйҙәгеҙ, башта бәхет һәм бәхетһеҙлек хаҡында ике лаҡап һөйләйем әле, булмаһа. Тәүгеһе. Бер мәл аҡһаҡалға бер ҡатын килгән дә:

-Ҙур бәхетһеҙлеккә тарыным, олатай. Ғүмерем буйына иремә бер туҡтауһыҙ мыжып, уны моңһоҙлоҡта, бешәлкәһеҙлектә, әйткән һүҙҙәремде ҡолағына элмәүҙә ғәйепләнем. Бөгөн ҡот осҡос хәлде белеп ҡалдым: баҡтиһәң, ул тыумыштан һаңғырау булған икән. Өҫтәүенә, мин уны гел әрләп йәшәнем, юҡҡа ғына үҙен битәрләгәнмен, бахырҡайымды. Хәҙер миңә нимә эшләргә икән? - тип түгелеп илап ебәргән.

-Бының өсөн һиңә ҡайғырырға түгел, ҡыҙым, киреһенсә, шатланырға ғына кәрәк, - тигән аҡһаҡал, һис тә иҫе китмәйенсә.

-Нисек инде шатланырға, олатай, ул һаңғырау булған өсөнмө ни? - ти аптырай төшкән ҡатын.

-Эйе, нәҡ һаңғырау булғаны өсөн, ҡыҙым. Донъяла һинең иреңдән дә бәхетлерәк кеше юҡ, шуны аңлап шатланып ҡына йәшәй бир, - тип аҡһаҡал ҡатынды оторо ярһытып ебәргән.

-Был һүҙҙәреңде ауыҙыңдан ел алһын, олатай, ниңә мине мыҫҡыл итеп, юҡты һөйләйһең? Һаңғыраулыҡ - ул зәғифлек, ә зәғиф кеше бәхетле була тиме инде? - тип ҡатын алдағынан да нығыраҡ иларға, үкерергә тотонған.

Аҡһаҡал уның бер аҙ тынысланғанын көтөп торған да:

-Ирем тыумыштан һаңғырау булған, тиһең бит әле, ҡыҙым. Бына шулай: Хоҙай Тәғәлә уны тыумыштан һиңә инселәгән, шуның өсөн һинең мыжыуыңды ишеттермәҫ өсөн һаңғырау итеп яралтҡан. Әле бына минең өйгә инеүеңә биш минут ҡына ваҡыт үтте, ә шул ике арала күпме мыжып, күпме илап, минең дә мейене серетеп өлгөрҙөң. Шулай булғас, аңла, донъяла һинең иреңдән дә бәхетлерәк кеше юҡ, сөнки ул һинең мыжыуыңды бөтөнләй ишетмәй йәшәгән, - тип уны әйткән һүҙе менән иҙәнгә лыпын ултыртҡан.

Аҡһаҡалдың һүҙҙәрен бар тулылығында тәрән итеп аңлауҙан ни иларға, ни көлөргә белмәйсә, оҙаҡ ваҡыт шаңҡып ултырған ҡатын. Шулай ҙа ҡайтыр саҡта тынысланып, аҡһаҡалға күҙен асҡан өсөн рәхмәт әйтеп, артабан ире менән мөнәсәбәтен нисек ҡорорға кәңәш һораған.

- Ирендең һаңғыраулығы бөтһөн, тиһәң, мыжыуыңды туҡтатаһың инде, ҡыҙым, - тип оҙатып ҡалған уны аҡһаҡал.

Икенсе лаҡап. Үҙенең ҡойроғон тешләргә ынтылып, бер урында зыр әйләнеп өйөрөлгән эт көсөгө янына оло йәштәге Аҡбай килгән дә:

-Бер нисә көн буйына һине күҙәтеп йөрөйөм. Ниңә улайтып бер урында өйөрөләһең ул, кеше көлдөрөп? - тигән эт ләғәтендә уаулдап.

-Эттең бәхете ҡойроғонда, тиҙәр, шуны тоторға теләйем дә инде, - тигән көсөк аҡланырға теләгәндәй.

-Эй, ялбыр, хәстрүш, шуны ла белмәйһеңме ни, бәхеттең артынан ҡыуырға ярамай, бәхет үҙе һинең артыңдан эйәрергә тейеш, - тигән Аҡбай эре генә ҡиәфәттә.

-Нисек итеп эйәрергә тейеш? - тип сыйылдау тауышы еткергән бәләкәй көсөк.

-Бына ошолай итеп, - тигән дә, Аҡбай, ҡойроғон һәләндереп йүгереп китеп барған.

Хәҙер инде ошо ике лаҡаптан сығып, ысын мәғәнәһендә бәхетле йәшәүҙең нисек булырға тейешлеге хаҡында уй йөрөтөп ҡарайыҡ. Тәүге осраҡта ирҙең тыумыштан һаңғыраулығы йәғни бәхетһеҙлеге ысынында уның бәхетле булыуына ишаралаһа, икенсе осраҡта һәр кемдең бәхете үҙе менән һәм уның артынан ҡыуырға һис тә кәрәкмәгәнлеген аңлата, йәғни бәхет артынан ҡыуыу кешене бәхетһеҙлеккә генә алып килә. Ошо ике лаҡаптан сығып беҙ шуны ла аңлайбыҙ: донъяла бәхет күрһәткесе, билдәләүсе шкалаһы юҡ. Американдар хыялланғанса, тик комфортлы, уңайлы етеш тормош ҡына бәхетте билдәләмәй. Сөнки бер фәйләсуф әйткәнсә, "Донъяла абсолют бәхет булмай, сөнки бәхет ҡошон ҡулына эләктереүсе кеше уны юғалтмаҫ өсөн бәхетһеҙ борсолоуҙар кисереп йәшәргә мәжбүр". Йәғни көн артынан төн, төн артынан көн килгән һымаҡ, бәхет менән бәхетһеҙлек сиратлашып килгән осраҡта ғына беҙ ысын бәхеттең ниндәй икәнлеген аңлай алабыҙ. Изгелек менән яуызлыҡты ла беҙ уларҙың икеһенең йәнәш ҡуйылыуы арҡаһында ғына айырабыҙ һәм билдәләйбеҙ. Шулай уҡ ҡара төҫ булған өсөн генә аҡ төҫ - аҡ, аҡ төҫ булғаны өсөн генә ҡара төҫ - ҡара. Ошоларҙың сығып, шундай ике формула- билдәләмә сығарырға була хатта:

1.Нимә ул бәхет? Ул - бәхетһеҙлек онотолоп торған миҙгел йәғни күңел тыныслығы табыу.

2.Нимә ул бәхетһеҙлек? Ул - ҡәҙерен белмәгән бәхет миҙгеле йәғни күңел тыныслығын юғалтыу.

Бәхет һәм бәхетһеҙлек парадоксы шунда: беҙ бәхетле минуттар кисергәндә генә бәхетһеҙлекте, бәхетһеҙлек кисергәндә генә ҡасандыр бәхетле булғаныбыҙҙы аңлайбыҙ. Бер яҡтан уйлағанда, бәхетле булыуҙың сере яп-ябай ҙа, икенсе яҡтан ҡараһаң, улай уҡ та түгел икән.

Шулай ҙа, мәҡәлдә әйтелгәнсә, ни өсөн кешене кешенән фәҡәт бәхет айыра, алыҫлаштыра һуң? Кешенең аңын ойотоп, ғүмерҙең, яҡыныңдың, кеше ҡәҙерен онотторор бәхет, ғөмүмән, кешегә ни өсөн кәрәк һуң? Шул уҡ ваҡытта кешелек тарихында бәхетһеҙ осраҡтың, ҙур юғалтыуҙарға бәйле ҡыйралыштарҙың, катаклизмдарҙың, киреһенсә, кешеләрҙе берләштереүсе сәбәп булыуы хаҡында ла бихисап миҫалдар килтерергә булыр ине.

Кем белә, бәлки, "бәхет" тигән төшөнсә бөтөнләй юҡтыр, бәлки, уны ҡара көстәр кешенең аңын йоҡлатыу, һиҙгерлеген кәметеү маҡсатында ғына уйлап тапҡандыр? Ә бит беҙҙең иң бәхетле мәлебеҙ әсәйебеҙ ҡарынында ятҡан сағыбыҙ. Үҙебеҙ ошо хәлде аңлап етмәйенсә, ғүмер буйына бәхет артынан ҡыуабыҙ ҙа, уңышһыҙлыҡҡа юлығып, күңел тыныслығын юғалтабыҙ, шунан үҙебеҙҙе бәхетһеҙгә һанап илайбыҙ. Артабан тағы ла ошо уҡ хаталарҙы ҡабатлайбыҙ, тик үҙебеҙ әсә ҡарынында ятҡан саҡтағы иң бәхетле сағыбыҙҙы юғалтыуыбыҙҙы ғына аңлап бөтөрмәйбеҙ. Кем белә, бәлки, баҡыйлыҡҡа күскәс, нимә эҙләгәнебеҙҙе аңлайбыҙҙыр ҙа, тик ул саҡта инде...

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**
**(Аҙағы бар).**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Өфөлә Шанхай хеҙмәттәшлек ойошмаһы һәм БРИКС илдәренең саммиттарына әҙерлек сиктәрендә яңы ҡунаҡханалар төҙөү өсөн иң уңайлы шарттар булдырыласаҡ. Был хаҡта республика Президенты Рөстәм Хәмитов халыҡ-ара саммиттарға әҙерлек буйынса кәңәшмәлә хәбәр итте. Шанхай хеҙмәттәшлек ойошмаһы форумында алты мең кешенең ҡатнашыуы көтөлә. Өфөнөң әлеге ҡунаҡханалар комплексы ҡунаҡтарҙың барыһын да һыйҙырып бөтә алмаясаҡ. Өфөлә йәмғеһе 48 ҡунаҡхана бар. Шул уҡ ваҡытта ҡунаҡхана бизнесының табышы буйынса республика Волга буйы федераль округында - беренсе, ил буйынса етенсе урынды биләй.

✓Ошо уҡ кәңәшмәлә Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов кәңәшмәлә ҡатнашыусыларҙы ҡалала төҙөләсәк ҡунаҡханалар проекттары менән таныштырҙы. Объекттарҙы тәү сиратта "Каруанһарай" сауҙа-эш комплексы, Конгресс-холл биләмәләрендә төҙөү планлаштырыла. Шулай уҡ Ирек Ялалов башҡа проекттар тураһында ла һөйләне. Улар араһында - "Аҡбуҙат" ипподромы янындағы, Маяковский скверы ҡаршыһындағы, Революцион, Гоголь урамдарындағы, Цюрупа һәм Вәлиди урамдары киҫешкән урындағы ҡунаҡханалар, "Башҡортостан" ҡунаҡханаһына өҫтәп төҙөләсәк 139 бүлмәле бина.

✓"Инновацион Рәсәйҙең фәнни һәм фәнни-педагогик кадрҙары" федераль маҡсатлы программаһы сиктәрендә студенттарҙың проекттар конкурсы һөҙөмтәләренә ярашлы, Башҡорт дәүләт университеты, М.Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты һәм Өфө дәүләт нефть техник университеты еңеүселәр иҫәбенә инде.Проекттар конкурсында Рәсәй Федерацияһының 157 юғары уҡыу йорто ҡатнашты. Еңеүселәр үҙҙәренең программаларын тормошҡа ашырыуға РФ Мәғариф һәм фән министрлығынан гранттар аласаҡ. Был аҡсаға студенттарҙың конструкторҙар бюроһын һәм уға оҡшаш структураларҙы үҫтереү өсөн ҡорамалдар һатып алынасаҡ.

✓Өфө юлдарында ремонт эштәрен 20 октябргә тамамлау планлаштырыла. Был хаҡта ҡала хакимиәтенең Коммуналь хужалыҡ һәм төҙөкләндереү идаралығынан хәбәр иттеләр. Әлеге ваҡытта юл эштәре баш ҡаланың 39 объектында алып барыла.

**"Башинформ"дан.**

✔ "Хөкүмәт һәр һумды һәм һәр тиндә һанаясаҡ, ләкин шул уҡ ваҡытта илдең барлыҡ граждандары өсөн дә уңайлы һәм заман талаптарына ярашлы йәшәү шарттары булдырасаҡ", тине Д. Медведев.



ИҠТИСАД ӘЛИФБАҺЫ

# ҠАҘНА ХӘЛДӘРЕ

**Һуңғы арала телевизор, радио һәм ваҡытлы матбуғат саралларында Рәсәйҙең "2013-2015 йылға федераль бюджеты" хаҡында күп һөйләйҙәр, йыш яҙалар. Ысынлап та, илдең иктисади йәһәттән тотороҡло булыуын, тимәк, Рәсәй халҡының лайыҡлы йәшәйешен тәьмин итеүсе документ бөтә яҡтан уйланылған булырға һәм төрлө ситуацияларҙы күҙ уңында тоторға тейеш. Рәсәй Хөкүмәте был юҫыҡта төүге аҙымды эшләне лә инде. Уҙған кризис һөҙөмтәләрен күҙ уңында тотоп, закон проекты яңы форматта, йәғни ҡаты бюджет ҡағиҙәләре индереп башҡарылған һәм нефттең алдағы йылдарҙағы уртаса хаҡына бәйләнгән.**

Бюджет ҡағиҙәһенә ярашлы, илдең ҡаҙнаһы 2013 йылда нефттең бер барреле 91 долларҙан, 2014 йылда - 92 долларҙан, ә 2015 йылда 93 долларҙан сығып иҫәпләнәсәк, тип фараз ителә. Әгәр ҙә ул ваҡытта нефттең фактик хаҡы әле нигеҙ итеп алынған хаҡтан артып китһә, өҫтәмә килемдәр, яңы ҡағиҙәгә ярашлы, Резерв фондына ебәреләсәк. Әйткәндәй, Резерв фонды иҫәбенә аҡса күсереү йылдан-йыл артып барасаҡ. Әгәр 2013 йылда был һан 373 миллиард һум күләмдә иҫәпләнһә, 2014 йылда ул 596 миллиард, ә 2015 йылда иһә 818 миллиард һум тәшкил итәсәк, тип планлаштырыла. Бер-нисә йыл элек бар донъяға ябырылған иктисади кризистың ауыр эҙемтәләренән Рәсәйҙе нәҡ Резерв фонды ҡотҡарып ҡалыуын иҫкә төшөрһәк, Хөкүмәттең был аҙымы, әлбиттә, хуплауға лайыҡ. Тимәк, макроэкономик хәүефтәрҙе иҫәпкә алғанда, нефттең хаҡы ныҡ түбәнәйгәндә лә (был осраҡта нефттең бер барреле 80 долларҙан кәмерәк булыуы күҙ уңында тотола) Рәсәй иҡтисады тотороҡло буласаҡ, тип ышанырға урын бар, сөнки илдең Резерв фондында ҡара көнгә тип тупланған аҡса буласаҡ. Ләкин күпмелер күләмдә аҡса туплау өсөн ниндәйҙер өлкәләге сығымдарҙан баш тартыу зарур. Закон проектына ярашлы, сығымдарҙың ҡыҫҡарыуы, башлыса, илдең энергетик һәм транспорт инфраструктураһына, шулай уҡ башҡа өлкәләргә лә ҡағыласаҡ.

Бюджет проектының өҫтөнлөклө өлөшөн социаль йөкләмәләрҙе үтәү алып тора, тип белдерҙе Рәсәй Хөкүмәте Премьер-министры Дмитрий Медведев. Бюджетта шулай уҡ пенсияны арттырыу, балалар пособиеһын индексациялау, инвалидтарға ярҙам итеү һәм эшһеҙҙәргә социаль ярҙам күрһәтеүгә, ә врач, уҡытыусы, фән, мәҙәниәт һәм социаль өлкәләрҙә эшләүселәрҙең эш хаҡын арттырыуға ла аҡса һалынған. Мәҫәлән, мәғарифҡа һәм фәнгә өс йыл эсендә өҫтәмә рәүештә 133 миллиард һум аҡса бүленәсәк, тине Хөкүмәт башлығы. Һаулыҡ һаҡлау өлкәһе лә ситтә тороп ҡалмаясаҡ. Киләһе йылда, мәҫәлән, был өлкәлә 2,5 триллион һум күләмдә аҡса тотоноласаҡ, тип билдәләнә. Ә мәҙәниәт өлкәһенә йыл һайын 100 миллиард һум аҡса һалыныасы көтөлә. Дәүләт сәйәсәте ауылдың йәшәү кимәлен үҫтереүҙе лә өҫтөнлөклө урынға ҡуя һәм аграр өлкәгә һалынған сығымдарҙың да күләмен арттыра. Мәҫәлән, аграр комплексының бөтә өлкәләрен дә үҫтереү өсөн 2020 йылға тиклем иҫәпләнгән махсус программа төҙөлгән һәм уға ярашлы ауыл хужалығы яҡынса 500 миллиард һум күләмендә ярҙам аласаҡ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Дәүләттең көсө һәм етешлеге, тәү сиратта, кешеләрҙән тора. Әлбиттә, хөкүмәт һәр һумды һәм һәр тиндә һанаясаҡ, ләкин шул уҡ ваҡытта илдең барлыҡ граждандары өсөн дә уңайлы һәм заман талаптарына ярашлы йәшәү шарттары булдырасаҡ", тине Д.Медведев. Беҙгә иһә былардың барыһы ла ҡоро һүҙ генә түгел, ә ысынлап та, ябай халыҡ мәнфәғәтен күҙ уңында тотоп башҡарылған эштәр икәнлегенә ышанырға ғына ҡала.**

Сәлимә АРЫҪЛАНОВА әҙерләне.

...ГӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

**Республика көнөн ҡаршылағанда Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов һәм уның урынбаҫары Сынтимер Баязитов матбуғат конференцияһы уҙғарҙы. Һүҙ, нигеҙҙә, байрам саралары һәм баш ҡаланың уны ниндәй уңыштар менән ҡаршылауы тураһында барҙы. Шулай ҙа булдыҡлы етәксе байрам ваҡытында ла хужалыҡ, халыҡтың тормошон яҡшыртыу мәсьәләләрен тәүге урынға сығарыуын раҫланы.**

# ЕЛИСЕЙ ҠЫРҘАРЫ...

## Өфөлә лә буласаҡ!

Ирек Ишмөхәмәт улы әйтеүенсә, бөгөн өфөләләрҙең күбеһендә ҙур һорау тыуҙырған Октябрь проспектының бер нисә урынында юлдарҙың ябылып, транспорт хәрәкәтенең бер аҙ уңайһыҙлыҡтар тыуҙырыуы - киләсәктәге уңайлыҡтарға тәүге аҙым ул. "Баш ҡала урамдарында бер нисә урында йәйәүлеләр өсөн ер аҫты үткәүелдәре эшләнә. Был эстакада төҙөү мөмкинлеген бирәсәк. Әммә ер аҫты үткәүелен һалыу - ҡатмарлы мәсьәлә. Сөнки ер аҫтынан биш ҡат булып коммуникациялар селтәре үткән. Уларҙы ситкәрәк күсермәйенсә, юл һалыу мөмкин түгел. Ләкин ер аҫты үткәүелдәре булыу менән эстакада тураһында һүҙ алып барырға мөмкин буласаҡ", - тине ҡала округы хакимиәте башлығы.

Транспорт һәм юл йөрөү мәсьәләһенә килгәндә, баш ҡала округы хакимиәте тағы бер "ҡарлуғас" осорҙо - "Өфө-Шаҡша" ҡала электричкаһы эшләй башланы. Ул ҡала янынан Өфөгә 30 минутта килеп етеү мөмкинлеген бирә. Был маршрут 11 станцияны үҙ эсенә аласаҡ. Улар бер транспорттан икенсеһенә күсеп ултырыу майҙансығы ролен үтәйәсәк. Йәғни граждандар бер станцияла сығып, артабан теләгән еренә барыу өсөн ҡайҙалыр туҡталышҡа йүгерергә түгел, ә шунда уҡ икенсе төр транспортҡа күсеп кенә ултырырға тейеш буласаҡ. Йәки станцияға шәхси машинаһында килеп, шундағы туҡталҡала транспортын ҡалдырып, артабан электричкала китеү мөмкинлеге лә ҡарала. Станциялар заманса йыһазландыыласаҡ, улар даими һаҡ аҫтында буласаҡ. Әлегә проект тейешле инстанцияларҙа экспертиза үтә.

Шулай уҡ баш ҡаланың Ағиҙел яры буйында урынлашҡан Көньяҡ өлөшө лә киләсәктә ҙур үҙгәрештәргә дусар ителәсәк. 2015 йылға тиклем унда Дуҫлыҡ монументынан алып тимер юл күперенәсә ял итеү аллеяһы, автомобиль юлы һалыныуы планлаштырыла. "Күп кенә Европа илдәрендә, Волга буйы төбәктәренең күпселегендә йылға буйында ял итеү зоналары бар. Уларҙа заманса бутиктар, сауҙа нөктәләре, төрлө күргәҙмә майҙансыҡтары эшләй. Беҙ ҙә шундай кимәлгә сығырға тейешбеҙ", - ти Ирек Ялалов.

Әлеге ваҡытта ошо арауыҡта 200 шәхси йорт бар. Уларҙың 20-һе - муниципаль милектә. Алдағы өс йыл дауамында был йорттарҙа йәшәүселәр тулыһынса яңы фатирҙарға күсерелеп, бөгөнгә амбициоз күренгән план тормошҡа ашырыласаҡ.

**Әйткәндәй, күптәр Ленин урамына эленгән гирляндаларҙы күреп, нимәгә юрарға белмәй баш ваталыр, моғайын. Сер итеп кенә әйткәндә, улар Яңы йыл байрамына сюрприз буласаҡ. Аҙаға ғына булһа ла "Өфө Арбаты"на әүерелгән урам, ваҡыты етәс, мең төҫтәрҙә балҡып, Париждың Елисей ҡырҙарын хәтерләтәсәк.**

Зәйтүнә ӘЙЛЕ.

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# ТӨРЛӨ ТЕЛДӘ...

## телдәр данланды

**М.Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетында II Халыҡ-ара "Телдәр фестивале" байрамы уҙҙы. Төрлө халыҡ һәм милләт вәкилдәре ҡатнашлығында үткән күркәм сара Бөтә донъя мәғариф проекты сиктәрендә ЮНЕСКО етәкселегендә Өфөлә икенсе йыл рәттән ойоштоuorola.**

Йылдан-йыл фестивалдең географияһы киңәйә бара. Был, әлбиттә, сараның юғары кимәлдә уҙыуына, телдәргә булған ихтирамдың һәм лингвистикаға ҡарата ҡыҙыҡһыныуҙың артыуына булышлыҡ итә. Быйылғы фестивалдә республиканың 38 төбәгенән, Рәсәйҙең төрлө ҡалаларынан, шулай уҡ Америка, Германия, Болгария, Вьетнам, Нигерия, Иран, Төркиә, Төркмәнстан, Ҡаҙаҡстан һәм башҡа илдәрҙән вәкилдәр ҡатнашты. Сара киң аудиторияға йүнәлтелгән һәм ҡатнашыусыларҙың йәше һәм дәрәжәһе буйынса сикләнмәгән булыуы менән отошло, йәғни фестивалдә ҡатнашыусы һәр милләт кешеһе үҙенең теле, үҙ иленең мәҙәниәте һәм йолалары менән таныштырып сығыш яһау мөмкинлеге алды.

Быйылғы фестивалдең төп үҙенсәлектәренең береһе - сарала студенттарҙан тыш, мәктәп уҡыусыларының да ҙур теләк менән ҡатнашыуы, ти ойоштороусылар. Мәктәп уҡыусылары йыл дауамында телгә ҡағылышлы төрлө фәнни тикшеренеүҙәр алып барып, сит телдәр өйрәнеп, уларҙы сағыштырып һәм һығымталар эшләп, фестиваль ҡунаҡтары алдында абруйлы сығыш яһаны. Айырыуса М.Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетының башҡорт филологияһы студенттары тарафынан башҡорт теле хаҡында әҙерләнгән "Халҡыма амана" әҙәби-музыкаль композицияны ҡунаҡтар йылы ҡабул итте.

- Донъя телдәре күп яҡлы, төрлө яңғырашлы, уларҙың һәр береһе уникаль һәм ҡабатланмаҫ феномен, - тине М.Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетының башҡорт теле һәм уны уҡытыу методикаһы кафедраһы мөдире Сәлимә Айбулат ҡыҙы Таһирова. - Фестиваль төрлө милләт вәкилдәрендә сит телде өйрәнеүгә ҡыҙыҡһыныуы тыуҙырыу, лингвистик компетенцияны үҫтереү, ҡатнашыусыларҙың профессиональ һәм мәҙәни бәйләнешен булдырыу кеүек маҡсаттарҙы тулыһынса аҡланы. Сарала ҡатнашыусылар грек, испан, португал, итальян, һәм башҡа бик күп телдәрҙең моңон, үҙенә генә хас аһәңен ишетеү, үҙҙәренең мәҙәниәтен күтәреү һәм башҡа милләт вәкилдәре менән аралашыу мөмкинлеге алды. Һәр кеше фестивалдән үҙ халҡы, теле, мәҙәниәте менән ғорурланып, сит телдәр өйрәнеүгә маҡсаттар билдәләп, яңы дуҫтар табып, ҡан-ҡәрҙәштәр менән осрашып, рухи яҡтан байып хушлашты. Һәм барыһы ла фестивалдең киләсәктә "Телдәр фестивале" генә түгел, ә "Телдәр һәм мәҙәниәт фестивале" булараҡ уҙғарылыуы милләттәр араһындағы бәйләнештәрҙең, дуҫтарса мөнәсәбәттәрҙең тағы ла тығыҙыраҡ булыуына килтерер ине, тигән фекер менән таралышты.

Гөлназ САФУАНОВА.

Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✔ Башҡортостан Хөкүмәтендә Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһының яңы лауреаттарына - журналист Салауат Хәмиҙуллинға, яҙыусылар Рәшит Шәкүров менән Камил Йыһаншинға премиялар тапшырыу тантанаһы үтте. Наградаларҙы Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов тапшырҙы.

✔ Күгәрсен районында Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәтенең Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге премияларын тапшырыу тантанаһы үтте. Быйыл лауреат исеменә түбәндәге журналистар лайыҡ булды: "Юлдаш" радиоһы журналисы Зөһрә Арсаева, "Аманат" журналы журналисы Дамир Шәрәфетдинов, "Сәҡмағош мәғлүмәт үҙәге" редакция-нәшриәт комплексы журналистары Рәзифә Сәхәпова һәм Илдус Тимерханов, "Күгәрсен хәбәрҙәре" гәзитенең штаттан тыш хәбәрсеһе Тәлғәт Ишемғолов лайыҡ булды.

✔ "Өфө-Арена" һәм Спорт һарайы кассаларында Өфөлә үтәсәк Донъя чемпионатына билеттар һатыла башланы. Спорт һарайы кассаларынан көйәрмәндәр "А" төркөмө матчтарына билеттар һатып ала аласаҡ, унда Швеция, Финляндия, Чехия, Латвия һәм Швейцария командалары көс һынашасаҡ. "Өфө-Арена" кассаларында "А" төркөмө матчтарына билеттар һатыла, был төркөмдә Рәсәй йыйылма командаһынан тыш, Канада, Словакия, АҠШ һәм Германия спортсылары уйнаясаҡ. "Өфө-Арена" кассаларына - 1506, Спорт һарайы кассаларына 689 билет йүнәлтелгән, сикләүҙәр ҙә бар: һәр кешегә иң күбендә дүрт билет һатып алырға рөхсәт ителә.

✔ Ошо көндәрҙә Өфө ҡала округы хакимиәтендә Башҡортостан Республикаһы көнөнә арналған саралар үтә. Шуларҙың береһе - төрлө һөнәр эйәләрен, ғалимдарҙан алып социаль өлкәлә эшләүсе үҙ эшенең оҫталарын Өфө ҡала округы хакимиәте башлығының Маҡтау ҡағыҙҙары һәм билдәләре менән бүләкләү тантанаһында Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов үҙе ҡатнашты, бүләкләнеүселәрҙе Республика көнө менән ихлас ҡотланы, эштәрендә уңыштар, яңынан-яңы үрҙәр теләне.

✔ Өфөлә III төбәк-ара экология форумы эшләй башланы. Шулай уҡ форум сиктәрендә XVII "Уралэкология. Сәнәғәт хәүефһеҙлеге-2012" махсус күргәҙмәһен асыу тантанаһы үтте. Башҡортостан баш ҡалаһында форумда ҡатнашыусылар ҡалдыҡтар менән идара итеү системаһын үҫтереү, производство объекттарын сәнәғәт хәүефһеҙлеге менән тәьмин итеү һәм башҡа мәсьәләләрҙе тикшерәсәк.

✓ *Гәзит уҡыусыларыбыҙҙы Әмир Сафиндың проекты буйынса фекер алышырға саҡырабыҙ. Тәҡдим һәм иҫкәрмәләрегеҙ менән уртаҡлашығыҙ, батырыбыҙға лайыҡлы һәйкәл ҡуйыуға үҙ өлөшөгөҙҙө индерегеҙ.*



*ЙӨҘӨН КҮРЕП, ЙӨҘ ОЯЛМАҺЫН!*

# САЛАУАТ ПРОСПЕКТЫНДА...

## Салауатҡа һәйкәл

**Донъяла һәйкәлдәрҙең күплегенә һәм төрлөлөгөнә иҫ китерлек! Ниндәйҙер ваҡиғаға ҡарата ҡуйылғаны ла, аныҡ кешене һынландырғаны ла бихисап. Был дөрөҫтөр ҙә, сөнки өнһөҙ һәйкәлдәр беҙҙе үткәнебеҙ менән бәйләй, үҙҙәренең мөһабәтлеге һәм бөйөклөгө менән ыңғай тойғолар уята.**

Башҡортостан да ошондай һәйкәлдәре булыуы менән ғорурлана ала. Ә улар араһында иң билдәлеһе, һис шикһеҙ, баш ҡаланың Ағиҙел ярындағы Салауат Юлаев һәйкәле. Ул оҙаҡ йылдар дауамында өфөләләрҙең дә, ҡала ҡунаҡтарының да яратҡан урындарының береһе булып ҡала килә. Башҡорт батырына ҡуйылған тағы бер һәйкәл баш ҡаланың Зәки Вәлиди урамында, Ҡоролтай бинаһы алдында урынлашҡан. Ләкин оҙаҡламай Салауат Юлаевҡа һәйкәлдәр һаны тағы ла артырға мөмкин. Өфөлә йәшәүсе Әмир Сафин Салауат Юлаев проспекты менән Зәки Вәлиди урамы киҫешкән урында, йәғни Өфөгә ингән ерҙә, батырға тағы ла бер һәйкәл ҡуйыу идеяһы менән яна. Пенсионер фекеренсә, әлегә тик реклама таҡталары менән генә сыбарланған проспектта ошондай һәйкәлдең булыуы мөһим, сөнки был батыр хәтеренә ихтирам күрһәтеү менән бер рәттән, баш ҡалаға мәртәбә лә өҫтәйәсәк.

Ысынлап та, Әмир Зөфәр улы ҡыҙыҡлы һәм кәрәкле мәсьәлә күтәрә, сөнки Өфө кеүек миллионлы ҡала өсөн батырға ҡуйылған ике генә һәйкәл бик әҙ. Тик ҡуйыласаҡ һәйкәлдең бар яҡтан уйланылыуы, ныҡлап тикшерелеүе һәм, иң мөһиме, халыҡ тарафынан хупланыуы шарт. Ә әлеге проектҡа килгәндә, авторҙың эскизына ярашлы, һәйкәл бөгөлгән ағас формаһында буласаҡ һәм тыуған Башҡортостанына ҡарап тороусы батыр йөҙөн һынландырасаҡ. Тәү ҡарашҡа матур һәм оригиналь күренгән һәйкәл проекты... ысынында ҡороған ағасты хәтерләтә, имеш. Үҙенән йәшәү дәрте, тереклек һуты һәм азатлыҡ һулышы бөркөп тормаған һәйкәл халыҡ күңелендә лайыҡлы урын табырмы һуң? Ләкин күпме кеше, шул тиклем үк фекер һәм кемгәлер оҡшамаған проект башҡа берәүҙең күңеленә хуш килергә мөмкин. Ошоно күҙ уңында тотоп, гәзит уҡыусыларыбыҙҙы Әмир Сафиндың проекты буйынса фекер алышырға саҡырабыҙ. Тәҡдим һәм иҫкәрмәләрегеҙ менән уртаҡлашығыҙ, батырыбыҙға лайыҡлы һәйкәл ҡуйыуға үҙ өлөшөгөҙҙө индерегеҙ.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Баш ҡалала оҙаҡламай тағы ла 5 һәйкәл ҡуйыласаҡ, тип көтөлә. Ленин исемендәге паркта 1812 йылғы Ватан һуғышына арналған һәйкәлдәр комплексы, тимер юл вокзалы территорияһында Башҡортостандан Бөйөк Ватан һуғышына китеүселәр хөрмәтенә мемориал, шулай уҡ Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Зәйнәб Биишеваға, Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәримгә һәм рәссам Михаил Нестеровҡа һәйкәлдәр асыласаҡ.**

**Наҙгөл САФИУЛЛИНА.**




*ҠУЛЛАНЫУСЫ ӘЛИФБАҺЫ*

## ҺЫУЫТҠЫС

**Хаҡы ла, ҙурлығы ла уртасараҡ булған һыуытҡыс алырға ине, ундай тауар хәҙер минең өсөн күпмегә төшәсәк?**

- Бер-ике кешегә иҫәпләнгән ҙур булмаған һыуытҡыстың хаҡы 10 мең тирәһе тора, ләкин бөгөн 3-4 кешелек стандарт ғаиләгә иҫәпләнгән һыуытҡыстар ҙур һорау менән файҙалана. Улар бөтәһе лә ике камералы, ә хаҡы - 20 мең һум самаһы. Ҡайһы бер өҫтөнлөктәре, шул иҫәптән тутыҡмай торған ҡорос корпус өсөн тағы ла кәмендә 5-10 мең өҫтәргә тура киләсәк.

**Яңы етештерелгән һыуытҡыстарҙы иретеп мәшәҡәтләнергә кәрәкмәй, тип ишеттем, улар ниндәй була?**

-Күпселек заманса һыуытҡыстарҙың һыуытҡыс бүлегендә автоматик иретеү йөйләмаһы ҡаралған. Һыуытҡыстың компрессоры эшләгән саҡта камералағы иреткес йәйланма боҙлана һәм компрессор билдәле бер ваҡыт һайын эшләүҙән туҡтаған арала боҙ иреп, компрессор йылыһы тәьҫирендә быуға әйләнә. Туңдырыу камераһы ҡулдан йә булмаһа автоматик режимда иретелә. Тәүге осраҡта ни бары һыуытҡысты һүндереп тороу ҙа етә, ә икенсе осраҡта туңдырыу камераһында бәҫ ҡаплатмай торған система эшләй. Бындай система ҡайһы бер һыуытҡыстарҙың һыуытыу камераһына ла ҡуйылған. Улар "ҡулдан" иретелә торған һыуытҡыстарҙан әллә ни ҡиммәт түгел, ләкин шуныһы: вентиляторы бер аҙ тауышланыбыраҡ эшләй.

**Яңы һыуытҡыс алғайным, ул иҫкеһенә ҡарағанда электр энергияһын икеләтә күберәк тотона, ни өсөн шулай?**

- Энергия һаҡлағыс ҡиммәте яғынан һыуытҡыстар туғыҙ класҡа бүленә. Яңы һыуытҡысығыҙҙың ниндәй класҡа ҡарауын үҙегеҙ ҙә тикшерә алаһығыҙ: уның корпусына йәбештерелгән ҡағыҙҙа А-нан С-ға тиклем хәрефтәрҙе эҙләгеҙ. А+ һәм А++ билдәләре лә яҙылған булһа, бындай һыуытҡыстар электр энергияһын айырыуса һаҡ тотона торған төрҙәре икәнлекте аңлата. Ҙур һыуытҡыстар уртасалары һәм бәләкәйҙәренә ҡарағанда энергияны күберәк тотона. Был хаҡта өҫтәмә мәғлүмәтте уларҙы файҙаланыу буйынса яҙма ҡулланмала ла табырға була. Шуға күрә, әгәр һеҙҙең өсөн иң тәүҙә һыуытҡыстарҙың энергияны һаҡсыл тотоноуы мөһим икән, уның бәләкәйерәк төрҙәренә өҫтөнлөк бирегеҙ.

## ГАЗ КОЛОНКАҺЫ

**Фатирымдағы иҫкергән газ колонкаһы урынына яңыһын алып ҡуйырға йыйынам. Уны һатып алғанда, был приборҙың ниндәй функцияларына иғтибар итергә?**

- Газ колонкаһы газ үткәргес магистралгә тоташтырылмаған торлаҡ йорттар өсөн кәрәк. Бындай һыу йылытҡыс һайлағанда уның иң төп элементтарының ышаныслылығына иғтибар итергә кәрәк. Файҙалы функциялары - электрон тоҡандырғыс, күп быуынлы хәүефһеҙлек системаһы (һаҡлағыс термостат датчигы, гидравлик клапан һ.б). Башҡа төр техника кеүек үк, колонкалар ҙа энергия тотоноу буйынса кластарға бүленә. А++ һәм А+ класлы приборҙарҙы һайларға кәңәш итәбеҙ, улар энергия һаҡлау буйынса яңы Европа стандарттарына ярашлы эшләнгән һәм 20 процентҡа тиклем энергия экономиялай.

**Әсәйем яңғыҙы йәшәй, газ колонкаһы менән файҙалана. Йыш ҡына ул газды һүндерергә онота. Ошо йәһәттән хәүефһеҙлекте тәьмин итеүсе контролләүсе приборҙар юҡмы икән?**

- Биналарҙағы һәм фатирҙарҙағы һауаның газланыу кимәлен билдәләүсе датчиктар ҡуйыу буйынса төрлө ойошмалар түләүле хеҙмәттәрен тәҡдим итә бөгөн. Газланыу кимәлен күрһәтеүсе прибор түшәмдән 30 см түбәнерәк урында ҡуйыла һәм электр селтәренә тоташтырыла. Бер үк ваҡытта газ үткәргескә клапан ҡуйыла. Бүлмә эсенә аҙ ғына кимәлдә газ таралған хәлдә лә был турала сигнал алғандан һуң ул газды яба һәм хәүеф-хәтәрҙән һаҡлай. Шуға күрә газ йыһаздарын урынлаштырғанда уға газ контролләүсе приборҙар ҡуйырға онотмағыҙ.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА әҙерләне.**

# Х А Л Ы Ҡ   Д А У А Һ Ы



## Күҙгә арпа сыҡһа

❖ Табала етен орлоҡтарын ҡыҙҙырып, ҡулъяулыҡҡа һалып төйнәргә һәм ауыртҡан урынды йылытырға.

❖ Арпаға көнөнә 2-3 тапҡыр таҙартылған һарымһаҡ һөртөргә.

❖ Тирләгән тәҙрә һыуы менән көнөнә 2-3 тапҡыр ышҡырға. Бының өсөн тәҙрә быялаһы таҙа булырға тейеш.

❖ Ҡулъяулыҡты одеколонға манып алырға һәм ябылған күҙ ҡабағына һалырға һәм өҫтөнән ҡул усы менән ҡапларға. Арпа кибә һәм юҡҡа сыға.

## Энурез

❖ Кистән бер ҡалаҡ укроп орлоғон термосҡа һалып, ҡайнар һыу ҡойғас, ҡапҡасын ябып, иртәнсәккә тиклем төнәтергә. Иртән һөҙөргә, һыуытырға һәм ас ҡарынға эсергә. Дауалау курсы ике аҙнаға тәғәйенләнгән, әммә ҡайһы берҙә биш көн дә етә, барыһы ла организмдың торошона бәйләнгән.

❖ Зәңгәр йәки аҡ балсыҡты һыуҙа иҙеп (бер стакан шишмә һыуына 1-2 балғалаҡ балсыҡ), 8-10 сәғәт төнәтергә, балсыҡты болғатмаҫҡа тырышып, һыуын ипләп кенә ҡойоп алырға. Ошо һыуға тәпәй үләне (лапчатка прямостоячая) тамыры порошогын (балғалаҡтың 1/4 өлөшө) һибеп, 40-ар грамлап, ашарҙан 1 сәғәт алда йылы көйөнсә эсергә.

❖ 1 балғалаҡ меңъяпраҡты бер стакан ҡайнар һыуҙа төнәтергә. Урап, бер сәғәт торорға. Көн һайын 2-3 тапҡыр ашарҙан 1 сәғәт алда яртышар стакан эсергә.

❖ Бер тигеҙ өлөштә һары мәтрүшкә менән һарығүҙ (золотысячник) үләндәрен болғатып, 1 балғалаҡ үләнде бер стакан ҡайнар һыуҙа төнәтергә һәм сөй итеп, көнөнә 1-2 стакан эсергә. Һары мәтрүшкәне гипертония һәм бауыр сирҙәре менән яфаланыусыларға эсергә ярамай. Һары мәтрүшкәне юл япрағы үләне орлоғо менән алыштырырға була (бер стакан һыуға 1 балғалаҡ орлоҡ йәки 1 балғалаҡ юл япрағы үләне). Шулай уҡ көнөнә 3-4 тапҡыр ас ҡарынға 1-2 стакан эсергә.

## Йүткереү

Йүткереү ныҡ йонсотҡанда ошондай дауа ҡулланып ҡарағыҙ: 1 стакан һөттө ҡайнатып сығарғас та уттан алығыҙ һәм 1 ҡалаҡ аҡ май, 1 ҡалаҡ бал, бысаҡ осонда сода, 1 сей йомортҡаның һарыһы, иң һуңынан 2-3 тамсы 5 процентлы йод өҫтәгеҙ. Балаларға көнөнә 3 тапҡыр йылы көйөнсә яртышар стакан эсерергә. Һыуытҡыста һаҡларға.

**Марат ИШМӨХӘМӘТОВ.**

*УҠЫТЫУСЫҒА ҠУЛЛАНМА*

# ДИН ҺӘМ МӘҘӘНИӘТ



## Бишенсе дәрес: "Ислам мәҙәниәте нигеҙҙәре"

Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең иҫ китмәле ныҡышмалылыҡ менән яңы динде - исламды тарата башлау тарихын үткән дәрестә, Уның бер ниндәй ҡаршылыҡҡа ла ҡарамай, маҡсатын тормошҡа ашыра барыуын аңлатырға кәрәк. Уй-ниәттәре саф булғанға, бер кемгә ҡарата ла хилафлыҡ ҡылмағанға, Уға бер-бер артлы енеү килә. Иң мөһиме, ул, үҙ күңеле саф булғанлыҡтан, халыҡ алдында ихлас, асыҡ йөҙлө була һәм ышандыра ала. Уның һөйләгән һүҙе менән башҡарған эше бер ваҡытта ла айырылмай. Сафлыҡ тураһында һөйләһә - үҙе саф, тоғролоҡ тураһында һөйләһә - үҙе тоғро, изгелеккә өндәһә - үҙе изге ғәмәлдәр ҡыла. Фәҡәт һүҙең менән эшең айырылмаһа ғына ниәттәрең тормошҡа аша. Шуға ла халыҡ, яланғаның юлы ҡыҫҡа, ти. Мөхәммәттең бәйғәмбәрлеге, юлында килеп тыуған ҡаршылыҡтар һәм енеүҙәре тураһында һөйләгән саҡта ошо сифаттарға баҫым яһарға һәм уның шәхесе аша тәрбиә һабаҡтары бирергә кәрәк уҡыусыларға.

## Бишенсе дәрес: "Донъя диндәренең мәҙәниәт нигеҙҙәре"

Диндәрҙең барлыҡҡа килеүе тураһындағы теманы үткән саҡта картанан Израиль илен күрһәтеп һөйләү маҡсатҡа ярашлы булыр. Ғайса бәйғәмбәрҙең (Иисус Христос) тыуған ҡалаһын, йәшәгән-йөрөгән ерҙәрен күрһәтеп һөйләү - христиан диненең ҡайҙан башланыуын аңлатыуҙа ярҙам булыр. Ғайса бәйғәмбәрҙең халыҡ һөйөүен нисек яулауы тураһында һөйләргә кәрәк. Унда кешеләрҙе дауалау һәләте көслө була. Уға алыҫ-алыҫ ерҙәрҙән ауырыу-сырхауҙар туҡтауһыҙ мөрәжәғәт итә. Ғайса бәйғәмбәр уларҙы башҡаларҙың күҙ алдында һауыҡтырып ебәрә. Был хәлгә ғәжәпкә ҡалған кешеләр уны Алла улы тип уйлай башлай. Ғайса бәйғәмбәр дауалап ҡына ҡалмай, кешеләрҙе яҡшылыҡҡа өндәй. Уның тәғлимәтенә мөкиббән ышанған уҡыусылары - Матфей, Лука, Марк һәм Иоанн һәр ваҡыт уның менән бергә йөрөй. Әммә йәһүд халҡы Ғайса бәйғәмбәрҙән дауалау ғына түгел, әҙләкһеҙ йонсоткан дошмандарынан ҡотҡарыуын һорай. Был өмөттәре аҡланмағас, Ғайса бәйғәмбәрҙе арҡысаҡҡа ҡаҙаҡлайҙар. Үлгәндән һуң уҡыусылары Ғайса бәйғәмбәрҙең вәғәҙәләрен яҙып тарата башлай. Ошо тәғлимәт "христианлыҡ" тип атала.

Ғәрәптәр мәжүси булған, илаһтарға табынған. Был илдә изге күңелле, аҡыллы, үҙ иленең киләсәге, халҡының именлеге тураһында туҡтауһыҙ уйланған Мөхәммәт бәйғәмбәр бер генә Алла барлығы тураһындағы тәғлимәткә нигеҙ һала. Ул "ислам" тип атала. Ғайса бәйғәмбәр халыҡтың һөйөүен дауалау һәләте менән яулаһа, Мөхәммәт бәйғәмбәр ҙә ғәжәп изгелекле, тоғро, ярҙамсыл һәм саф күңелле булыуы менән танылыу таба.

Будда ла шулай уҡ иң элек үҙ шәхесе менән ихтирам яулай. Ул да, үҙе мул һәм етеш тормошта йәшәһә лә, башҡаларҙың йәшәйеше тураһында уйлана, ауыр тормошто енеләйтеү, сырхауҙарға ярҙам итеү сараһын эҙләй, йәшәйештең асылына төшөнөргә теләй.

Шулай итеп, бәйғәмбәрлектә генә түгел, башҡа ғәмәлдәр башҡарғанда да һүҙең үтемле булһын өсөн иң элек үҙ холоҡфигелең менән кешенең һөйөүен яуларға тейешһең, шул саҡта ғына халыҡ һиңә ышаныр, тип, уҡыусыларҙы бәйғәмбәрҙәр шәхесе өлгөһөндә тәрбиәләргә кәрәк. Уҡыусылар дәфтәрҙәренә ҡайһы халыҡтың ниндәй дин тотоуын яҙып ҡуйһын.

## Бишенсе дәрес: "Донъяуи этика нигеҙҙәре"

Яҡшылыҡ һәм яуызлыҡ төшөнсәләрен уҡыусыларҙың үҙҙәренән әйттерергә кәрәк. Һанап китеү генә түгел, дәфтәргә яҙҙырып ҡуйыу ыңғай һөҙөмтә бирер. Мәҫәлән, атай-әсәйгә ҡарата яҡшылыҡ ҡылыу нимә, насарлыҡ нимә - шуны тезеп яҙырға. Уҡытыусыға, тәбиғәткә, дуҫ-иштәренә, мал-тыуарға ҡарата был сифаттар нисек сағыла? Шунан яҡшылыҡ ҡылыуҙың үҙенә кире ҡайтыуы тураһында һөйләшергә кәрәк. Яҡшылыҡ ҡылыу кешенең үҙ күңеленә еңеллек килтерә. Кеше күңел енеллеге тоя икән - был уның кәйефенә ыңғай тәьҫир итә. Кәйеф торошо сәләмәтлеккә тәьҫир итә. Һин ярҙам иткән кеше ихлас рәхмәт әйтә икән, кәнә бүлы йөҙөндән йылмайыу китмәй. Көләс йөҙлө, күтәренке күңелле икәнһең, ваҡ-төйәккә кәйефең ҡырылып бармай. Берәй мохтажына хәйер бирҙең йәки ҡул ярҙамы күрһәттең икән, ул һиңә матур теләктәр теләй. Һинең турала матур фекер тарала. Яҡшы күңелле кешегә үҙе кеүек изгелекле кешеләр тартылып тора. Шулай итеп, яҡшылыҡ мөхите бар була.

**Мәрйәм БУРАҠАЕВА.**
**(Дауамы бар).**

*Аһ-Аһ!*

**Һуңғы йылдарҙа беҙҙең Бөрйәндә шәхси хужалыҡтарҙа малдар, айырыуса аттар һаны йылдам артты. Был ҡыуаныслы, әлбиттә. Ләкин миҙалдың икенсе яғы ла бар бит әле. Был малдарҙан күпме сабынлыҡ, сәсеүлек зыян күрә. Хәҙер улар хатта автомобиль юлдарына ла "хужа".**

# АТТАР, ЭТТӘР, ҺЫЙЫРҘАР...

## тояҡлы юлбаҫарҙарға әйләнә

Йәй. Бесән мәле. Машинама ауылдан ҡунаҡҡа килгән әсәйемде, ҡыҙым Ләйләне һәм һеңлемдең ҡыҙы Наҙгөлдө ултыртып, Иҫке Собханғолдан Байғаҙыға юлға сыҡтым. Был аралағы һәр боролош, һәр соҡор таныш булғас, елдәрәбеҙ генә. Буҙарған буйы тигән ерҙең сираттағы бер боролошонда йылҡы өйөрөнә тап булдыҡ. Улар юл тулып баҫып торалар. Машина сигналына иҫтәре лә китмәй. Урап үтерлек юл юҡ: һул яҡта - тау, уң яҡта - йылға, әрәмә. Яйлап ҡына яҡынлаша барып, сигнал биреп ҡарайым. Ыжламайҙар ҙа. Ахыры, түҙмәй, ҡыҙҙар машинанан төшөп киттеләр. Юлдан ваҡ таш алып, тегеләргә һелтәгеләй башлағас, өйөр яйлап ҡына ҡуҙғалды. Иң арттан ҡойола аунап быҫранған ат бара. Үҙем дә төшөп, ҡыуыша бирҙем дә, ҡапыл күңелде ҡурҡыу биләп алды - өйөр айғыры уҫал булып ҡуймаһын. Шуға йәһәтләп машинаға инеп, ҡыҙҙар артынан бара башланым. Үҙем эстән генә, хәҙер уңға һыулауға боролоп төшкән һуҡмаҡ булырға тейеш, моғайын, шунда боролорҙар, тип өмөтләнәм. Әгәр борлмаһалар, йәнә 2-3 саҡырым шулай барырға кәрәк буласаҡ. Буҙарған буйының яртыһын ғына үткәнбеҙ. Ә уның оҙонлоғо 5 саҡырым самаһы. Гел боролош та боролош.

Әйткәндәй, өйөр айғырының уҫал булыу ихтималлығына ла тормош өйрәткәйне. Килдегәлдә йәшәгән саҡта еләккә йөрөгәндә "Ул тирәләге өйөр айғыры бик уҫал, аңғарып йөрөгөҙ, ҡыңғырау тауышы ишетелгән яҡҡа бармағыҙ", тип иҫкәртә торғайнылар. Кҙҙаллауым дөрөҫ булды - теге һырты быҫраҡ ат уңға ҡайырылды. Бүтәндәре лә уға эйәрҙе. Мин, юл ҡағиҙәләрен боҙа биреп булһа ла, машинамды аттарҙан йыраҡраҡ ергә, юлдың һул яғына, ҡаяға һырындырып тиерлек туҡтаттым. Ҡыҙҙар нимәнәндер ҡыҙыҡ табып, рыя ғына көлөшә-көлөшә һуңғы аттарҙы ҡыуалай. Шул ваҡыт күҙем йылға яғына төштө - унан мығырҙаған һымаҡ итеп, ажарланып уртын сәйнәй-сәйнәй, теге "быҫраҡ" ат сабып сығып килә. Башы ҡайҡайған, үҙе бер туҡтауһыҙ нимәлер һөйләнгән кеүек. Ҡыҙҙар яғына елдерә был. Ҡапыл хәлдең нимәлә икәнен аңлап ҡалып, ишегемде аса һалдым да, асырғанып: "Ҡыҙҙар, машинаға йүгерегеҙ!"- тип ҡысҡырып ебәрҙем. Ҡурҡыныстың ҡайҙан икәнен дә аңламаған ҡыҙҙар минең тауыштың үтә хафалы булыуын аңлап, инстинкт буйынса, икеһе бер юлы машинаның мин ултырған яғындағы артҡы ишегенә ташланды. Әйләнеп ҡарауыма, теге айғыр сабып килеп, машинаның алғы тәҙрәһенә моронон терәгәйне инде. Ҡараштарыбыҙ осрашты. Ҡот осҡос ине ул ҡараштар... Башымдан, хәҙер генә был йә машинаны сапсый, йә артына әйләнеп, типкеслә инде, тигән уй зыйлап үтеп китте. Икенсе уй ҙа шул уҡ йәшен тиҙлегендә үтте: "Ярай, ҡыҙҙар ҡасып өлгөрҙө әле, машинаны сапсыһа сапсыһын, тик үҙебеҙгә генә зыян килтермәһен". Машинамды артҡа сигендерергә уйлағайным, айғыр тәҙрәләрҙән күҙен дә алмайынса, машинаның уң яғына сабып сыҡты. Күрәһең, минең өйөрөмә һөжүм итергә теләүсе ҡыҙҙар ҡайҙа булды һуң әле, тип эҙләргә ынтылғандыр. Шунан файҙаланып, йән көсөмә газға баҫтым һәм машина үкереп алға ташланды. Айғыр беҙҙең арттан бер-ике аҙым яһап ҡуйҙы ла, өйөрө яғына сапты. 200-300 метр самаһы үткәс кенә аңыма килгәндәй булдым. Тотош тәнемде дерелдәү баҫып алды. Күҙ алдымдан, ирекһеҙҙән, айғырҙың килеп етеп, ҡыҙҙарҙы типкесләүе, тешләүе йәки тапауы мөмкин булған картина үтеп киткәс, хатта ысын-ысындан сәсем үрә торҙо. Ҡыҙҙарҙы машинаға ҡая яҡлап йүгереүҙәре ҡотҡарҙы. Әгәр ҡыҙым үҙенең урынына, водитель янындағы урынға ынтылһа, айғырҙың юлына ғына тап булыр ине. Ул ваҡытта елкәһенән тешләп алыуы ла ихтимал булғандыр, моғайын...Бына шулай күҙ алдында фажиғәгә тарый яҙҙыҡ. Байғаҙыға "автопилот" менән барып еттем, шикелле. Машинанан төшкәндә аяҡтар ҡамыр һымаҡ ине. Көсҡә өйгә инеп еттем дә, ҡоланым.

Әйткәндәй, шул көндә генә БСТ-нан, иртәгә иртәнсәк Бөрйәндәге яңылыҡтар тураһында һөйләрһегеҙ әле, тик стандарт яңылыҡтар булмаһын, берәй ҡыҙыҡлыраҡ ваҡиға булһын ине, тип шылтыратҡайнылар. Мин кәнә буйы нимә һөйләрмен икән тип уйланып йөрөгәйнем. Һәм бына һиңә - мә! Иртәгеһенә инде был аттар менән булған ваҡиға тотош республика халҡына мәғлүм булды.

Хәйер, был тема дауамлы булды әле. Бер-ике аҙна тирәһе үткәндәр. Әлеге лә баяғы Байғаҙынан ҡайтырға сыҡтыҡ. Апайым үҙҙәренекенә түгел, һөйләшеп ҡайтайыҡ, тип, минең машинаға ултырҙы. Еҙнәм машинаһы менән оло юлға туранан сыҡҡас, алданыраҡ китте. Бетерә күперен үткәс, туғайҙа аттар күренә, еҙнәм дә туҡтап тора. Машинаһының капоты асыҡ. Боҙолғандыр, моғайын, тип, мин, "тәжрибәле водитель", эре генә баҫып тегенең эргәһенә атланым. Бәй, ауылдан ялтырап сығып киткән машинаның алғы "ҡанаты" ҡайырылған. Баҡтиһәң, юлда торған аттарға сигнал биргәс, берәүһе, "көйөп", йәмшәйткәнсе тибеп киткән икән. Бына һиңә! Саҡ ҡына тәҙрәгә эләкмәгән, Хоҙай аралағандыр. Тояҡ эҙе байтаҡ һүҙылып ҡалған. Өйөргә ҡараным. Эйе, теге беҙгә осраған аттарға оҡшағандар. Бына һиңә террористар, юлбаҫарҙар.

Әсәнсә ваҡиға ауыл эсендә булды. Төшкә ашҡа ҡайтып барабыҙ. Асфальттан беҙҙең яҡҡа боролған ергә газ үткәреүселәр торба һалып, элекке кимәлен еткереп күммәй киткәйне. Соҡор булып ятып ҡалды. Ҡышҡыһын машиналар сыға алмай, бер нисә тапҡыр тайып ултырғас, унда әҙ генә ҡырсын түккәйнеләр. Күрәһең, тоҙло булған. Былтырғы ямғыр асфальты булмаған юлдарҙың ылҡаһын ҡалдырманы бит инде. Бында ла шул хәл. Шул соҡор тапҡырында бер өйөр аттар тояҡтары менән соҡоп, ҡырсын ялайҙар. Ҡырағай йөрөп, тоҙһоғандар инде. Тотош юлды ҡаплап алғандар былар. Үтерлек түгел. Сигнал биреүемә ыжламайҙар ҙа. Төшөп, әлеге лә баяғы таш бәргеләп ҡараным. Юҡ, китмәйҙәр. Хатта берәүһе, енләнеп, артын сойорғота башланы. Машинаның фарҙарын ырғыта тибеп ебәрмәҫ, тимә. Тиҙ генә артҡа сигендем. Ә төшкө ашҡа туғандарыма барырға тура килде...

Тәүҙ ҡарашҡа ҡәҙимге генә күренгән һымаҡ ваҡиғалар. Ләкин улар бер йәйҙә һәм бер кеше менән йәки уның шаһитлығында булған хәлдәр. Ә юлда күпме кеше йөрөй... Күпме нервы бөткәнен, күңелдә күпме ҡурҡыу ҡалғанын үлсәр үлсәмдәр юҡ шул. Ҡыҙҙарҙың икеһе лә шунан һуң айғырҙан уттан ҡурҡҡан һымаҡ ҡурҡалар.

Һуңғы ваҡытта урамда берәҙәк эттәр ҙә күбәйҙе. Улай тип әйтеүе генә лә аҙ, улар кешенең битарафлығынан, яҙаһыҙлығынан файҙаланып, тамам шашты. Ауылдарҙа халыҡтың хәләл малының уларҙан зыян күреүен һанап бөтөрлөк түгел. Ваҡ мал, ҡаҙ, өйрәк берәҙәк эттәр өсөн ризыҡҡа, енел табышҡа әйләнде. Күптән түгел телевизорҙан ике эттең 1 йәшлек баланы һәләк итеүе хаҡында һөйләнеләр. Был ҡот осҡос ваҡиғаның шаһиты булған әләсәй кеше, баланың йолҡҡоланған, йәғни эт ауыҙынан ҡалған кәүҙәһен өйгә индереп һалғас, был тиклем ҡот осҡос хәлдә үҙен ғәйепләп, бәлки, был фажиғәне күтәрә алмай, үҙенә-үҙе ҡул һалған...

Хәҙер ҡышҡы ваҡытҡа ла ҡусмәгәс, беҙҙең балалар ҙа бит дөмҡараңғыла китә мәктәпкә. Ә бәйһеҙ эттәр һәр ауылда бар. Әлбиттә, фажиғәләрҙән Хоҙай аралаһын.

Эттәр хәҙер кәртәгә үк инеп тамаҡлай башланы малды. Былтыр, мәҫәлән, районыбыҙҙың бер ауылында иртәгә ҡорбанға салырға тип бикләп ҡуйған һарыҡты ашап ҡуйғанылар, быйыл Килдегол ауылында бер пенсионерҙың 6 һарығын кәртәһенә инеп тамаҡлап сыҡтылар.

Һыйырҙарҙың да урам тулып йөрөүе, хатта юл өҫтөндә көндәр буйы көтөүҙәре менән "ойоп" ятыуҙары хәҙер ғәҙәти хәл һымаҡ. Яңы закон да, бүтән ҡарарҙар ҙа тәртипкә өйрәтә алмай халыҡты. Бәғзе ауылдарҙа көтөү тигән нәмә социализм менән бергә емерелде. Ауылдарға яҡын ерҙәрҙәге сабынлыҡтар, сәсеүлектәр ҙә шуның һөҙөмтәһе булып юҡҡа сыҡты... "Балаңа баш булмаһаң, ул үҙе һиңә баш булыр" тигән әйтемдең "Малыңа баш булмағас, үҙе һиңә баш булыр" тигән варианты тыуыр мәл бөгөн.

**Таңһылыу БАҺАУТДИНОВА.**
**Бөрйән районы**
**Иҫке Собханғол ауылы.**

ТАРИХЫҢДЫ ТАНЫТ...

# МОЛДОВА БАШҠОРТТАРЫ

**Башҡортостан Фәндәр академияһы Гуманитар тикшеренеүҙәр институтының өлкән ғилми хеҙмәткәре, философия фәндәре кандидаты Зәкирйән ӘМИНЕВ менән башҡорттарҙың боронғо ата-бабаларының эҙенән сәйәхәтебеҙҙе дауам итәбеҙ.**



## Топонимдар тарих һөйләй…

Атап үтелгән Темесвар, Хакваранан тыш, тарихи Венгрия сиктәрендә тарихи Башҡортостан территорияһы менән параллелдәр тапҡан башҡа бик күп топонимдар ҙа теркәлгән. Шуға күрә Венгрияла ул топонимдарҙы башҡорттарҙың ата-бабалары ҡалдырған, тип ныҡлы ышаныс менән әйтергә мөмкин. Бындай топонимдарҙы Будапешт ҡалаһының "Cartographia" нәшриәтендә нәшер ителгән "Венгрияның автомобиль юлдары атласы"нан һис бер ауырлыҡһыҙ табырға мөмкин. Миҫалға - Бекеш (Bekes, Bekessamson Bekescsaba, Bekesszentandras, Bekecs), Мукач (Mohacs), Бурджан (Kis berzseny, Berzseny, Birjan), Варяш (Varias, Variasu Mic, Varaszlo), Балашты (Balastya, Balassa-Gyarmat), Tengeri, Кондорош (Kondoros), Бәшнәк (Bezenye, Bezsenyidolo), Таҙлар (Tazlar), Һакмар (Szakmar), Раваш (Ravazd), Уршаҡ (Karakoszorcsok, Borszorcsok Gyirmot), Юрматы (Gyarmat), Хазар (Kazar), Матрай (Matra), Курт (Kurt, Erdokurt). Туруш (Tereske), Бербалтавар (Berbaltavar), Бадраг (Bodrog), Urkut һ.б. топонимдарҙы индерергә мөмкин. Шунда уҡ Венгрияға сиктәш булған Югославияның христиан динен ҡабул иткән һәм славянға әйләнгән элекке бәшәнәктәрҙең вариҫтары - босняктар йәшәгән районында Баймак (Bajmak) һәм Мала Босна (Mala Bosna), йәғни Бала Бәшнәк ҡалаларын табырға мөмкин.

"Баймаҡ" топонимы Югославиянан тыш, "Баймах-Марахал" формаһында Венгрияның үҙендә лә теркәлгән. Был урын археологтарҙың сарматтарға ҡараған әйберҙәрҙе табыуы менән билдәле.

Баймаҡ, Баймакли атамалары сығыштары менән бәшәнәктәр, бурджандар һәм боронғо булғарҙар менән бәйле төрки телле гагауздар йәшәгән Молдавияла ла осрай. Баймаҡ топонимының бәшәнәктәр һәм боронғо башҡорттар менән бәйле булыуына уның ҡарағалпаҡтарҙа булыуы ла күрһәтә. Ә ҡарағалпаҡтарҙың килеп сығышы, бая үрҙәрәк әйтеп китеүемсә, бәшәнәктәр менән бәйле икәнлеге ғалимдар тарафынан күптән асыҡланған һанала. Шул уҡ территорияла Бабаляч, Ямач, Бекеш, Мукач топонимдары ла теркәлгән. Улар Башҡортостандың Баймаҡ районындағы Бәләләш, Ямаш, Бикеш, Моҡас менән бер үк тамырҙандыр.

Баймаҡ ҡалаһының телевышкаһы ултырған Ослотау менән Сусаҡ тигән тау араһында Элмә тип аталған матур бер урын бар. Беҙҙең яҡтарҙа элмә ағасы үҫмәй. Нишләп "элмә" тип атағандар икән, тип, уйлап, осона сығып булмаҫ кеүек ине. Әммә, "Хоҙай, бирәм, тигән ҡолона, сығарып ҡуйыр юлына", ти бит беҙҙең халыҡ. Миңә лә осраҡ ярҙам итте. Бәхтиһән, баяғы "элмә" гагауздарҙа ла бар икән. Гагауздарҙың топонимик һүҙлегендә "элмә" - "долгий, пологий спуск", тип аңлатылған. Был мәғәнә беҙҙең Баймаҡ эргәһендәге Элмәгә тап-таман тап килә. Баймаҡ телевышкаһы ултырған тау башына һөҙәк оҙон юл тартылғанлығын Баймаҡ яҡтарында булған кешеләр (иғтибар итһәләр) күргәне барҙыр. Был телевышкалы тауға Баймаҡтан тик шул Элмә аша ғына менергә мөмкин. Бүтән юл юҡ. Тимәк, гагауздар ерендәге һәм беҙҙең башҡорт ерендәге "элмә" атамаһының мәғәнәләре бер үк булып сыға.

Молдавияның гагауздар йәшәгән төбәгенең бер урынында Кәрбәлиә тигән атама бар. Был Кәрбәлиә беҙҙең башҡорттоң "Башҡорт ҡайҙан килеп сыҡҡан?" тигән легендаһындағы Гәрбәлә менән бер үк атамалыр. Был риүәйәттә "Башҡорттар төрөктәрҙең Гәрбәлә тигән ҡалаһынан килеп сыҡҡан", тиелә. Гагауздарҙың оҙаҡ йылдар төрөк дәүләтенә ҡарауын һәм хәҙерге телдәренең төрөк теленә яҡынлығын иҫкә алһаң, башҡорт риүәйәтендәге "төрөк" тип телгә алынған урындың хәҙерге Молдавияла булыуы бик тә ихтимал. Гагауздар һәм молдавандар бынан бер нисә йөҙ йыл элек кенә, Суворов етәкселегендәге урыҫ армияһы Измаилды алғанға ҡәҙәр, төрөк ҡулы аҫтында инеләр. Измаилды алғандан ғына ул ерҙәр урыҫ батшаһы ҡулы аҫтына инә башлай.

Шулай итеп, мәҡәлә "Молдова башҡорттары", тип аталһа ла, проблема Молдова ерҙәре менән генә сикләнмәй, ә киңерәк итеп алғанда, Румынияның Добруджа яғына, унан инде мадъярҙарҙың секеи тип аталған этнографик төркөмө йәшәгән Трансильванияға ҡарай һуҙылып, Венгрия яғына китәләр. Унан инде был проблема Венгрия менән сиктәш Австрия һәм Словакия ерҙәрен дә үҙ эсенә ала. Ҡыҫҡаһы, фәнгә йәштәр килер һәм улар был проблеманы хәл итә алыр, тема үҙ тикшеренеүсеһен табыр, тип өмөтләнәйек.

Әйткәндәй, Закирйән Әминевтың ошо тема буйынса фәнни мәҡәләһен Интернет селтәрендә уҡығандан һуң, Урғаҙа.ру сайты администраторы, сығышы менән Баймаҡ егете тарих фәндәре кандидаты Марсель Маннапов, үҙе әйтмешләй, ҡыҙыҡ өсөн генә эҙләү системаһына төрлө варианттарҙа һорау ебәреп, ике сәғәт виртуаль киңлекте ҡыҙыра. Һөҙөмтәлә:

Молдова Республикаһында 1917 йылға тиклем Баймаклия олоҫо булыуын асыҡлай: Баймаклия, 1917 йылға тиклем - Бессарабия губернаһы, Измаил өйәҙе, Баймаклия олоҫо; 1917 йылдан һуң ул Румыния составына инә (хәҙерге ваҡытта - Молдова Республикаһы, Кантемир районы);

Синыфташтар.ру сайтынан Молдованан, Кагулынан "Башҡорт" фамилиялы ҡыҙҙы таба;

Кагул ҡалаһының сайттарынан телефон базаһында соҡоноп, "Башҡорт" фамилияһын йыйғас, Башкир Л. Н. тигән кеше булыуын асыҡлай; сығышы менән Молдавиянан булып, һәләк булған башҡорт хәрбиe тураһында мәҡәләгә юлыға; Молдова Республикаһы территорияһында төрки тамырлы ҡайһы бер топонимдарҙың этимологияһы тураһында мәҡәләләр таба.

**Был мәғлүмәттәр буйынса эҙләнеүҙәр киләсәктә дауам итер, тип ышанып, теманы ябып торайыҡ.**

**(Аҙағы).**

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



# 1812 ЙЫЛҒЫ ВАТАН ҺУҒЫШЫНЫҢ...

## орден кавалерҙары

**Абдразаҡов Оморҙаҡ Ишдәүләт улы** - 1812 йылғы Ватан һуғышында һәм рус армияһының 1813-1814 йылдарҙағы сит илдәргә походында ҡатнаша. Прапорщик. Ырымбур губернаһы Троицк өйәҙе Әйле олоҫонон Әбдрәзәҡ ауылынан (хәҙерге Ҡыйғы районының Әбдрәзәҡ ауылы). Ырымбур линияһында хеҙмәт үтә. 1812 йылда генерал П. Х. Виттенштейн кавалерияһында конвой хеҙмәтен үтә. 4-се Башҡорт полкы составында Рәсәй империяһы, Саксония, Пруссия, Франция территорияларындағы хәрби операцияларҙа ҡатнаша. 3-сө дәрәжә Изге Анна ордены (1813), "1812 йылғы Ватан һуғышы иҫтәлеге", "1814 йылдың 19 мартында Парижды алған өсөн" миҙалдары менән наградланған.

**Ҡаранай Искәндәров** - 1812 йылғы Ватан һуғышында һәм рус армияһының 1813-1814 йылдарҙағы сит илдәргә походында ҡатнаша. Поход старшинаһы. Ырымбур губернаһы Өфө өйәҙе Мең олоҫонон Минатйетәр ауылынан (Иглин районының Меңйетәр ауылынан). Рәсәй империяһы, Саксония, Пруссия, Франция территорияларындағы хәрби операцияларҙа ҡатнаша. Изге Георгий Хәрби орденының Отличие билдәһенә (1813) лайыҡ була. 5-се атлы полк 1812 йылдың 25 июнендә хәрби губернатор Г. С. Волконскийҙың бойороғо буйынса Ырымбур губернаһы Бөгөлмә өйәҙенең Ҡарабан ауылында 11-12-се кантон башҡорттарынан төҙөлә. 1813 йылда Данциг блокадаһында, Лейпциг алышында, Парижды алыуҙа ҡатнаша.

**Ибраһим Биксура улы Биксурин** (И. Баҡсурин) - 1812 йылғы Ватан һуғышында һәм рус армияһының 1813-1814 йылдарҙағы сит илдәргә походында ҡатнаша. Ғәскәр старшинаһы (1814). Ырымбур губернаһының Минзәлә өйәҙенән. Сит илдәргә походтарҙа 1-се Башҡорт полкы составында була, һуңыраҡ - 5-се Башҡорт полкы составында. Полк командиры. Айырым батырлығы өсөн орден менән наградланған һәм юғары дәрәжә алған. "Император ғәли йәнәптәре һәм уның миңә бирған юғары власы исеменән, Лейпциг ҡалаһы эргәһендә 4-се һәм 6-сы октябрҙәге алышта күрһәткән ҡаһарманлығығыҙ һәм уны баш штаб начальнигы генерал-лейтенант Сабанеевтың раҫлауы буйынса, ҡаһарманлығығыҙға ғәҙел ихтирам белдереп һеҙгә 3-сө класлы Изге Анна ордены юллайым"; "5-се Башҡорт полкының ғәскәр старшинаһы Биксурин баш командующийҙың баш квартираһында конвойҙа булғанында намыҫлы хеҙмәте өсөн юғары раҫлауға лайыҡ", - тиелә награда юлламаһында. 3-сө дәрәжә Изге Анна ордены (1814), "1812 йылғы Ватан һуғышы иҫтәлеге", "1814 йылдың 19 мартында Парижды алған өсөн" миҙалдары менән наградланған.

**Ҡаһарман Әлмәшев** - 1812 йылғы Ватан һуғышында һәм рус армияһының 1813-1814 йылдарҙағы сит илдәргә походында ҡатнаша. Ырымбур губернаһы Бөрө өйәҙе Һундар олоҫонон Юлдаш ауылынан (хәҙерге Ҡариҙел районы). 5-се башҡорт полкы составында Рәсәй империяһы, Саксония, Пруссия, Франция территорияларында барған хәрби операцияларҙа ҡатнаша. Изге Георгий Хәрби орденының Отличие билдәһенә лайыҡ була. "1812 йылғы Ватан һуғышы иҫтәлеге", "1814 йылдың 19 мартында Парижды алған өсөн" миҙалдары менән наградланған. 8-се Башҡорт атлы полкы 1812 йылдың 8 августында император бойороғо буйынса төҙөлгән. 1813 йылда Глогау блокадаһында ҡатнашҡан. Кавалерия генералы барон Л. Л. Беннигсендың Польша армияһы составына ингән.

**Зөлкәрнәй Ҡотлогилдин** - 1812 йылғы Ватан һуғышында һәм рус армияһының 1813-1814 йылдарҙағы сит илдәргә походында ҡатнаша. Ырымбур губернаһының Ырымбур өйәҙенән. 8-се Башҡорт полкы составында Рәсәй империяһы, Саксония, Пруссия, Франция территорияларындағы хәрби операцияларҙа ҡатнаша. Изге Георгий Хәрби орденының Отличие билдәһенә лайыҡ була. "1812 йылғы Ватан һуғышы иҫтәлеге", "1814 йылдың 19 мартында Парижды алған өсөн" миҙалдары менән наградланған. 9-сы атлы полк 1812 йылдың 8 августында император Александр Беренсенең указына ярашлы 9-сы кантон башҡорттарынан формалаштырыла. Бик күп хәрби акцияларҙа ҡатнаша. Хәрби юлын Парижға инеп тамамлай.

**Әнүәр ӘСФӘНДИЙӘРОВ.**

**(Дауамы бар).**

***✓ Компьютер үҙләштереп, уҡыусылар менән төрлө программалар өйрәнеп, оҫталыҡты бергәләп камиллаштырҙыҡ. 2004 йылдан башлап уҡыусыларым республика кимәлендә урын яулай башланы.***



# ТУҒАН туған тел уҡытыусыһы

**Республика мәктәптәрендә дәүләт теле булараҡ та, туған тел булараҡ та башҡорт телен уҡытыу буйынса борсоулы хәл килеп тыуҙы. БР Президентының август кәңәшмәһендәге сығышында яңғыраған "... эффектив булмаған сығымдарҙы 20 процентҡа кәметергә" тигән һүҙҙәрен күп етәкселәр башҡорт теле дәрестәрен кәметеү, милли-төбәк компоненты предметтарын уҡытыу буйынса директор урынбаҫарҙары ставкаларын бөтөрөү тип аңланы һәм шуны тормошҡа ашырып та ҡуйҙы. Ни өсөн башҡорт теле эффектив булмаған предмет булып сыҡты һуң әле? Ә бит ысынында бының киреһе күҙәтелә: республика һәм Рәсәй кимәлендәге конкурстарҙа еңеп сығыусыларҙың күпселеге башҡорт теле уҡытыусылары лаһа! Бөгөнгө ҡоробоҙға төрлө йылдарҙа "Башҡортостандың башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы" конкурсы еңеүселәре булған, Бөтөн Рәсәй туған тел уҡытыусылары конкурсында ҡатнашып, шулай уҡ призлы урындар яулағандарҙы - Өфө ҡалаһының 35-се урта мәктәбе уҡытыусыһы Эльза Юрис ҡыҙы Толомбаеваны, 159-сы урта мәктәптең туған телдәр буйынса директор урынбаҫары Гөлназ Әнүәр ҡыҙы Мөхәмәтйәнованы, 156-сы урта мәктәптең туған телдәр буйынса директор урынбаҫары, Өфө ҡалаһы фәнни-мәғлүмәти методик үҙәгенең милли мәғариф бүлеге методисы Гүзәл Иштимер ҡыҙы Фәхрисламованы, Ишембай ҡалаһының 2-се Республика башҡорт гимназия-интернаты уҡытыусыһы Рифат Риф улы Әйүповты саҡырҙыҡ һәм килеп тыуған хәл буйынса фекер уртаҡлашыуҙарын һораныҡ.**

**▸ Республикабыҙҙа башҡорт телен дәүләт теле итеп уҡытыу тәжрибәһенә 6 йыл. Ошо йылдар эсендә һәр уҡытыусының үҙенең уҡытыу алымы, үҙ тәжрибәһе барлыҡҡа килде. Һеҙ ҙә дәүләт телдәрен ғәмәлгә ашырыу майҙанының әүҙем ҡатнашыусылары, шуға ла тәүҙә үҙ тәжрибәгеҙ тураһында һөйләп үтһәгеҙ ине.**

**Гүзәл Иштимер ҡыҙы:** Педагогик эш тәжрибәмә 28 йыл. Юғары уҡыу йортон тамамлағандан һуң район мәктәбендә лә, Өфө ҡалаһының 48-се башҡорт лицейында ла, Республика башҡорт лицей-интернатында ла эшләнем. 2006 йылда мәктәптәргә дәүләт теле булараҡ башҡорт телен уҡытыу индерелгәндән һуң уҡытыусы ғына түгел, туған телдәр буйынса директор урынбаҫары булараҡ та күп эшләргә тура килде. Дөрөҫөн әйткәндә, дәүләт телен мәктәпкә индереүҙе яйға һалыу, балалар, уларҙың ата-әсәләре менән һөйләшеү кеүек эштәрҙе башҡорт теле уҡытыусылары үҙҙәре башҡарып сыҡты. Беҙҙең уҡытыусыларҙың һәр нәмәгә яуаплы ҡарау, ҡушылған эште урын-еренә еткереү кеүек сифаттары ошо ауырлыҡтарҙы еңеп сығырға ярҙам иткәндер, тим. Был осорҙа мин Орджоникидзе районының 156-сы мәктәбендә эшләй инем һәм башҡорт телен дәүләт теле булараҡ уҡытыуымдың беренсе һөҙөмтәһе шул булды, тип иҫәпләйем: рус мөхитендә үҫкән башҡорт балаларының рухы күтәрелеп, яурындары яҙылып китте, ә инде башҡа милләт балаларының башҡорт теленә ҡарата ихтирам тойғоһо уяныуын көндән-көн тоям.

Ошо уҡ йылдарҙа "Йыл уҡытыусыһы" конкурсына сығып, уның район, ҡала, республика этаптарын үттем, уларҙың барыһында ла беренсе урынға лайыҡ булдым. Бөтөн Рәсәй туған тел уҡытыусылары бәйгеһендә "Уҡытыусы-новатор" номинацияһында беренсе урын алдым.

**Гөлназ Әнүәр ҡыҙы:** Рус мәктәптәрендә башҡорт телен туған тел булараҡ ҡына түгел, дәүләт теле булараҡ та уҡытыу Өфө ҡалаһында күптән башланған булған. Һәр хәлдә, мин 1997 йылда Башҡорт дәүләт педагогия университетын тамамлап, Октябрь районының 42-се мәктәбенә эшкә килгәндә, унда балалар башҡорт телен уҡый ине, төркөмдәргә лә бүленә инеләр. Ата-әсәләрҙең "Нимәгә ул беҙгә башҡорт телен өйрәнеү?" тип йөрөгәнен хәтерләмәйем, бик күңелле итеп үткәрә инек дәрестәрҙе. 2006 йылда дәүләт теле булараҡ башҡорт теле ингәс тә артыҡ шау-шыу булманы, мин ул саҡта 141-се мәктәпкә күсеп өлгөргәйнем. Олимпиадалар, ғилми-ғәмәли конференцияларҙа уҡыусылар теләп ҡатнаша, урындар алып ҡыуана. Былтыр "Шаяниум" тапҡырҙар һәм отҡорҙар бәйгеһендә районда беренсе урын алдыҡ, ҡала конкурсында рус мәктәптәре араһында икенсе урынға сыҡтыҡ. "Һаумы, һаумы әкиәт!" конкурсында ҡатнашып торабыҙ. Үҙебеҙ ҙә камиллашырға тырышабыҙ. 2009 йылда мәктәп етәкселеге тәҡдиме менән "Йыл уҡытыусыһы" конкурсына сығып, районда еңеүсе булдым. Ҡала этабы иһә көтөлгәндән күпкә ауыр булды, унда методиканы яҡшы белгән, шәп уҡытыусылар ҡатнашты. Тимәк, хатта өс йыл эсендә генә лә баш ҡала уҡытыусылары шундай ҙур уңыштарға өлгәшеп өлгөргән, тигән һығымта яһарға була бынан. Ә шулай ҙа был конкурста биш еңеүсе исемлегенә индем. Ә артабанғы республика кимәлендәге конкурсҡа иһә сәмләнеп китеп әҙерләндем һәм гран-при яуланым. Ә Мәскәүҙәге Бөтөн Рәсәй конкурсында иһә беренсе урынға лайыҡ булдым.

**Эльза Юрис ҡыҙы:** Мин Ленин районының 35-се мәктәбендә 18-се йыл эшләп йөрөйөм, был белем биреү учреждениеһында ла 1995 йылда уҡ башҡорт теле уҡытыла ине. Шуға ла 2006 йылда башҡорт теле индерелеүе яңылыҡ булманы. Ҡалала бик элиталы мәктәп һанала, ул саҡтағы директоры Григорий Розенблюм тел өйрәнеүҙең мөһимлеген яҡшы аңлаған педагог булды. Был мәктәптә уҡытыусыларға битараф ҡарамайҙар, тәүге йылда завучыбыҙ 64 тапҡыр дәресемә инеп ултырҙы, ипләп кенә эшләргә өйрәтте. Конкурстарҙа ҡатнашҡанда ла һәр предмет уҡытыусыһы үҙенсә ярҙам итте. Ошондай мөхиттә уҡыусылар ҙа телде теләп өйрәнә, минең күңелемдә күреү өсөн генә тәнәфестә башҡортса һөйләшкән класым була торғайны хатта. Нисә йыл эшләйем, шунса йыл балаларҙы конкурсҡа әҙерләйем. "Иң мөһиме - ҡатнашыу" тигән принцип менән түгел, "Бәйгегә сығабыҙ - еңәбеҙ" тигән маҡсат ҡуйып әҙерләнәбеҙ, ата-әсәләр менән бергәләп эшләйбеҙ. Башҡорт филологияһы факультетына уҡырға ингән уҡыусыларым да бар.

Һөнәри бәйгеләргә килгәндә, мин ысын уҡытыусы "Йыл уҡытыусыһы" конкурсына сығырға тейеш, тип һанайым. Үҙемде әле өлгөрөп етмәгәнмен, тип иҫәпләһәм дә, 2010 йылда мәктәп коллективы тәҡдиме менән мин дә ҡатнаштым был конкурста. Ысынлап та, ҡала этабы ныҡ ауыр булды, унда икенсе урын, ә республика күләмендә гран-при алдым. Бында еңеүен еңдем дә, тик Мәскәүгә Бөтөн Рәсәй конкурсына китергә аҡса юҡ, Мәғариф министрлығы ла, ҡала һәм район мәғариф идаралыҡтары ла бер-береһенә һылтанды ла ҡуйҙы. Әлеге лә баяғы уҡыусыларым һәм мәктәбем ташламаны, мин класс етәксеһе булған кластың ата-әсәләре бағыусы булды һәм мин конкурсҡа киттем. Әммә унда тағы ла ауырлыҡтар көтөп торған булып сыҡты. Беренсенән, ул йылда ҡатнашыусылар һаны күп ине, икенсенән, конкурсты ойоштороусыларҙың ҡырыҫ мөнәсәбәте бик ныҡ аптыратты. Ә шулай ҙа уларҙың "Һеҙ башҡорт теленә көсләп өйрәтәһегеҙ балаларҙы, кемгә кәрәк һеҙҙең телегеҙ?" тип һөйләнеүҙәрен ишетмәмешкә һалышып, кәйефте төшөрмәй, матур итеп сығыш яһарға тырышылды. Тап шул саҡта ни тиклем Мәскәүгә бәйле икәнлегебеҙҙе, теләһәләр, уларҙың бер көндә телебеҙҙе юҡҡа сығара аласаҡтарын аңлап ҡайттым. Был конкурста "Юғары педагогик оҫталыҡ" номинацияһында еңеүсе булдым.



**Рифат Риф улы:** 1997 йылдан мәғариф өлкәһендә эшләйем. 2000 йылда Ишембайҙың 14-се һанлы мәктәбенән 2-се Республика башҡорт гимназия-интернатына уҡытырға күскәс, 2000-2001 йылдарҙа уҡ республика кимәлендә бер нисә асыҡ дәрес күрһәтергә тура килде. Гимназияның ул саҡтағы директоры Гөлназ Ғафир ҡыҙы Әхмәҙиева мине "Йыл уҡытыусыһы" конкурсында ҡатнашып ҡарарға тәҡдим итте. Шулай итеп, был конкурста мин 2001 йылда ҡатнашып, дүртенсе урын яуланым. Ул ваҡытта әле тәжрибә туплап өлгөрмәгән булғанмындыр, шуға ла маҡсат ҡуйып, уҡытыусы булараҡ, төрлө конференцияларҙа йышыраҡ сығыш яһай башланым, уҡытыу методикаһы буйынса мәҡәләләр яҙып баҫтырҙым, уҡыусылар менән ғилми эҙләнеү эштәре башлап ебәрҙек, бер юлы олимпиадаларға ла ныҡлап әҙерләндек. Шулай эшләй торғас, һөҙөмтәләр оҙаҡ көттөрмәне. Компьютер үҙләштереп, уҡыусылар менән төрлө программалар өйрәнеп, оҫталыҡты бергәләп камиллаштырҙыҡ. 2004 йылдан башлап уҡыусыларым республика кимәлендә урын яулай башланы. 2007 йылда бер уҡыусым менән Мәскәүгә лә барып ҡайттыҡ. Шунан һуң ғына мин 2012 йылда "Йыл уҡытыусыһы" бәйгеһенә яңынан килдем һәм еңеп сыҡтым. Рәсәй кимәлендәге конкурс Мордовияла булды. Ул беҙҙең конкурстан айырыла, бында уҡытыусының эш алымына, өлгәшкән уңыштарына түгел, күберәк халыҡтарҙың йолаларына, милли кейемдәренә иғтибар итәләр, булып сыҡты. Унда мин дөйөм конкурста өсөнсө урынға, шулай уҡ "Уҡытыусы-тикшеренеүсе" номинацияһына лайыҡ булдым.

**▸ Әйтегеҙ әле, һеҙ эшләгән мәктәптәрҙә һеҙгә тиклем республика кимәлендә лә, Рәсәй кимәлендә лә бына шундай уңыштар яулаған башҡа уҡытыусылар булғанмы?**

**Гүзәл Иштимер ҡыҙы:** Юҡ, әлбиттә. Ҡоробоҙҙа ҡатнашыусы был уҡытыусыларҙың барыһы ла мәктәп, район, ҡала тарихында беренсе тапҡыр Рәсәй һөнәри конкурсында урын алыусылар. Был йәһәттән уларға тиңдәр юҡ. Әммә улар һаман да ябай уҡытыусы булып йөрөй. Уларға берәй инновацион белем биреү учреждениеһын ышанып тапшырырға булыр ине. "Йыл уҡытыусыһы" конкурсы Өфө ҡалаһында 15 йыл элек башланған, унда еңеп сыҡҡан башҡа предмет уҡытыусылары иң кәмендә мәктәп директоры булып ултыра бөгөн. Башҡорт теле уҡытыусыһына, ни эшләптер, иғтибар юҡ. Элек баш ҡаланың йыл уҡытыусыһы исеменә лайыҡ булыусыларға республиканың атҡаҙанған уҡытыусыһы исеме бирелә торғайны, хәҙер ике йыл инде был исем республика кимәлендә еңеүселәргә генә тапшырыла. Өфө уҡытыусылары бынан да мәхрүм ҡалды.

***Юҡ, әлбиттә. Ҡоробоҙҙа ҡатнашыусы был уҡытыусыларҙың барыһы ла мәктәп, район, ҡала тарихында беренсе тапҡыр Рәсәй һөнәри конкурсында урын алыусылар. Был йәһәттән уларға тиңдәр юҡ. Әммә улар һаман да ябай уҡытыусы булып йөрөй. Уларға берәй инновацион белем биреү учреждениеһын ышанып тапшырырға булыр ине. "Йыл уҡытыусыһы" конкурсы Өфө ҡалаһында 15 йыл элек башланған, унда еңеп сыҡҡан башҡа предмет уҡытыусылары иң кәмендә мәктәп директоры булып ултыра бөгөн. Башҡорт теле уҡытыусыһына, ни эшләптер, иғтибар юҡ. Элек баш ҡаланың йыл уҡытыусыһы исеменә лайыҡ булыусыларға республиканың атҡаҙанған уҡытыусыһы исеме бирелә торғайны, хәҙер ике йыл инде был исем республика кимәлендә еңеүселәргә генә тапшырыла. Өфө уҡытыусылары бынан да мәхрүм ҡалды.***

**▸ Башҡорт теле уҡытыусыларының уҡыусылары ла уңышлы һөҙөмтә күрһәтһен өсөн ниндәйерәк саралар, йәғни олимпиада, конкурстар ойошторола - шул турала ла әйтеп китәйек...**

**Гүзәл Иштимер ҡыҙы:** Ошо алты йыл эсендәге дөйөм эш тәжрибәһенә килгәндә, йыл да олимпиадалар, донъя халыҡтары әкиәттәрен башҡорт телендә һөйләүселәрҙең "Һаумы, һаумы, әкиәт!" конкурсы, "Урал батыр" эпосын башҡарыусы йәш сәсәндәр конкурсы, башҡорт юморын үҫтереүсе "Шаяниум", башҡорт милләтле уҡыусылар өсөн балалар ҡоролтайҙары, башҡорт телен дәүләт теле булараҡ

***✓ Закондар бар, тик улар үтәлмәй. Милләт, милли тел мәсьәләһе - ул бик нескә урын, күрәһең, яңы федераль дәүләт стандарттарын эшләүселәр был хәҡиҡәткә бөтөнләй иғтибар итмәгән.***

өйрәнеүсе уҡыусылар өсөн интернет-викториналар үткәреү матур традицияға әйләнде. Тап Өфө уҡытыусылары инициативаһы менән тәүге тапҡыр башҡорт телен дәүләт теле булараҡ өйрәнеүсе төрлө милләт балалары араһында башҡорт теле буйынса олимпиада үткәрелде, унда өс меңгә яҡын уҡыусы ҡатнашты. Олимпиадала ҡатнашҡан рус, украин, сыуаш, немец, авар, мордва һәм башҡа бик күп төрлө милләтле уҡыусыларыбыҙ башҡорт теленән үҙҙәренең белемен күрһәтә алды, ни өсөн башҡорт телен өйрәнеүҙәрен һөйләп бирҙе. Мәктәптәрҙәге башҡорт теле уҡытыусылары методик берекмәләре лә әүҙем эшләй, ғәҙәттә, уларҙы башҡа берекмәләргә өлгө итеп ҡуялар.

# ТЕЛДЕ...

## ғына яҡларға тейешме?

**▸ Уҡытыусылар тарафынан күп тапҡырҙар ҡала мөхите шарттарында башҡорт телен дәүләт теле булараҡ өйрәнеүсе башҡорт булмаған уҡыусылар контингенты өсөн дәреслектәрҙең йөкмәткеһен яңыртыу, заман талаптарына яраҡлаштырыу, сит телдәрҙе уҡытыу методикаһына нигеҙләү мәсьәләләре күтәрелде. Бының буйынса хәлдәр нисек?**



**Гүзәл Иштимер ҡыҙы:** Беҙ, башҡорт теле уҡытыусылары, айырым дәүләт булып йәшәй алмайбыҙ. Башҡорт теле уҡытыусыһы ла шул уҡ классик методика менән, тик үҙ фәненең үҙенсәлектәренән сығып эш итә. Имеш, дәрестәрҙә грамматика өйрәтеү менән шөғөлләнәләр, тип ғәйеп ташларға тырышалар. Инглиз йәки рус телен грамматикаһыҙ ғына өйрәтеп буламы икән һуң? Һүҙҙең грамматик формаларын, ябай ғына ҡағиҙәләрҙе белмәйенсә, бала дөрөҫ итеп һөйләм төҙөргә лә өйрәнә алмаясаҡ. Бер тел өйрәнеү ҙә еңел бирелмәй, шулай булғас, башҡорт телен нисек еңеләйтеп өйрәнергә була һуң? Әлбиттә, телмәргә өйрәтеү менән телгә өйрәтеү араһында айырма ҙур. Тик хәҙер бит уҡыусыларҙың да кимәле үҫте, улар менән дәрестә телмәргә генә өйрәнеп ултырып булмай. Шуға ла бында методикаға бәйләнеү урынлымы икән?

**Эльза Юрис ҡыҙы:** Уҡытыусыларҙың ғалимдар, методистар менән берлектә лә, үҙҙәре лә методик ҡулланмалар, дәреслектәр, электрон ҡулланмалар яҙыу тәжрибәһе бар. Мин "Башҡорт теле. Интенсив курс" дәреслегенең авторҙашы булып торам. Шулай уҡ 103-сө мәктәп уҡытыусыһы Әлфиә Әбделмәнова рус мәктәптәренең 5-6-сы кластары өсөн электрон дәреслек әҙерләне, 141-се мәктәп уҡытыусыһы Фәүзиә Мортазина 1-се класс өсөн вариатив дәреслек яҙҙы. 156-сы урта мәктәп уҡытыусыһы Нәфисә Кинйәбаева башланғыс кластар өсөн "Башҡорт теле" дәреслеге авторҙашы. Шуны ла әйтеп китергә кәрәк: ҡала хакимиәте башлығы ҡарарына ярашлы, 2008 йылдан башлап башҡорт дәүләт теле буйынса 1-11-се кластар өсөн программаға ярашлы фәнни-методик рекомендациялар әҙерләүсе ижади төркөмдәр эшләне. Өфө уҡытыусылары ғалимдар менән бергәләп һәр класс өсөн дәрес пландары, календарь-тематик план һәм контроль эш тексталары әҙерләне. Ысынлап та, беҙ быны үҙебеҙ ҙә гел әйтә киләбеҙ, башҡорт телен дәүләт теле булараҡ өйрәнеүсе башҡорт булмаған уҡыусылар өсөн дәреслектәрҙең йөкмәткеһен яңыртыу күптән кәрәк. Тик бында ғалим-методистарҙың ошо проблемалар менән көн һайын осрашҡан, уларҙы хәл итергә тырышҡан уҡытыусылар менән тығыҙыраҡ бәйләнештә эшләүе мөһим шарт.

Тик шулай ҙа дәреслектәр оҡшамай, тип әйтергә түгел, булғандарына рәхмәт әйтергә кәрәк. Ҡалғанын уҡытыусы үҙе камиллаштырырға тейеш. Мәскәүҙә конкурста булғанда башҡа төбәктәрҙә туған телдәр буйынса электрон дәреслек түгел, китаптар ҙа юҡ икәнлеген күреп ҡайттыҡ. Туған телдәр дәреслектәре менән тәьмин ителеү йәһәтенән Башҡортостан иң алда тора, беҙҙә тел өйрәнеүҙең үҙенсәлектәрен иҫәпкә алып, һәр линияға тәғәйенләнгән дәреслектәр бар. Ғөмүмән, дәүләт теле булараҡ башҡорт телен уҡытам тиһәң, бөтөн шарттар ҙа бар. Алты йыл эсендә генә лә әллә күпме уңыштарға өлгәшелгән, киләсәктә тағы юғарыраҡ үрҙәргә күтәреләсәк әле башҡорт теле.

**Рифат Риф улы:** Методика ул бар фәндәр өсөн дә бер. Әгәр ҙә уҡытыусы бала менән эшләй икән, баланы ҡыҙыҡһындыра ала икән, бала үҙе үк был предметты өйрәнергә ынтылып торасаҡ, бының өсөн әллә ниндәй технологиялар ҡулланырға ла, методикалар уйлап ултырырға ла кәрәкмәй. Теләге булған кеше сит телде бер-ике ай эсендә өйрәнә ала. Тимәк, өйрәнеп була икән, өйрәтеп тә була. Бында методиканы үҙгәртеүҙә эш тормай. Әйтәйек, табиптар бер үк операцияны бер төрлө эшләй, сөнки ул операцияны икенсе төрлө юл менән яһап булмай. Предметтарҙы уҡытыу ҙа бер үк төрлө тиерлек, бары тик кемдер күңелен биреп, кемдер исем өсөн уҡыта. Был мәсьәләгә бәйле проблемалар ошонан килә.

**Эльза Юрис ҡыҙы**: Ысынлап та, уҡыусылар нимә менән ҡыҙыҡһына, уларҙы шул яҡтан ҡыҙыҡһындырырға кәрәк. Бөгөн уларҙың һәр береһе компьютер тип иҫе китә. Шуға ла был заман техникаһын уҡытыусы уҡыусыларҙан да яҡшыраҡ белергә тейеш. Элегерәк иншалар яҙғанда тел байлығы етеңкерәмәү сәбәпле, улар ҡороораҡ килеп сыға ине, компьютерҙа презентация эшләү формаһын индереп ебәрҙем. Хәҙер уҡыусыларым төрлө әҫәрҙәргә презентация эшләйҙәр, уларҙы үҙҙәренсә яҡлайҙар, береһе лә ҡабатланмай.

**Гөлназ Әнүәр ҡыҙы:** Һәр башҡорт теле уҡытыусыһы яңы технологиялар ҡулланып дәрестәр үткәрә, быға бар предмет уҡытыусылары өлгәшә алмай әле. Беҙҙең мәктәптә быйылдан һорау алыу һәм тест эшләү буйынса яңы техника индерелде, ул Вотум-технология тип атала. Компьютер, экран-проектор һәр мәктәптә бар, улар бик уңайлы, отошло, һөҙөмтәле технология. Бындай сараларҙы ҡулланыу уҡыусылар алдында абруйыңды мотлаҡ күтәрә.

**▸ Башҡорт теле уҡытыусыһы бөгөн конкурстарҙа урындар ала, балалар менән әүҙем эшләй, компьютер технологияларын үҙләштерә, шул уҡ ваҡытта, ата-әсәләр, балалар башҡорт телен өйрәнергә теләмәй, тигән һылтау менән ниндәйҙер сәйәсәт үткәрелә. Ни өсөн быйыл бындай хәл килеп тыуҙы һуң әле ул?**

**Гүзәл Иштимер ҡыҙы:** Беҙ закондан тыш бер нәмә лә эшләмәйбеҙ. Рәсәй Федерацияһы Конституцияһының 68-се статьяһында "Республикалар үҙҙәренең дәүләт телдәрен индерергә хоҡуҡлы" тиелә. Ошо уҡ статьяның 3-сө пунктында "Рәсәй Федерацияһы үҙенең составындағы бөтөн халыҡтарға ла туған телен һаҡлау, уны өйрәнеү һәм үҫтереү өсөн шарттар тыуҙырыу хоҡуғын гарантиялай" тип әйтелә.

Башҡортостан Республикаһы Конституцияһында аҡҡа ҡара менән, республикала рус һәм башҡорт телдәре дәүләт теле, тип яҙып ҡуйылған.

"РФ халыҡтары телдәре тураһында"ғы Рәсәй Федерацияһы законының 10-сы статьяһында "Республикаларҙа дәүләт һәм башҡа телдәрҙе өйрәнеү уларҙың законына ярашлы башҡарыла" тиелгән.

БР-ҙың "Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында"ғы законында дәүләт һәм башҡа телдәр БР-ҙың Мәғариф тураһындағы законына ярашлы башҡарыла, тиелә. БР-ҙың "Мәғариф тураһында"ғы законында ла дәүләт телдәре бер тигеҙ өйрәнелергә тейеш, тип әйтелә.

РФ-ның "РФ халыҡтары телдәре тураһында"ғы законының преамбулаһында "Рәсәй Федерацияһында ниндәйҙер телгә дошманлыҡ пропагандалау һәм кәмһетеү тыйыла" тиелә.

РФ-ның "РФ халыҡтары телдәре тураһында"ғы законында был законды боҙоусы юридик һәм физик шәхестәр РФ һәм РФ субъекты законына ярашлы яуаплылыҡҡа тарттырыла һәм ялыу бирелә, тиелә.

Бына ошондай закондар бар, тик улар үтәлмәй. Яңы федераль дәүләт стандарттары был закондар нигеҙендә эшләнмәгән, уларға яраҡлаштырылмаған. Милләт, милли тел мәсьәләһе - ул бик нескә урын, күрәһең, яңы федераль дәүләт стандарттарын эшләүселәр был хәҡиҡәткә бөтөнләй иғтибар итмәгән.

Эйе, Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов үҙенең сығыштарында башҡорт теленә гел ыңғай мөнәсәбәтен белдерә. Уның: "Бөгөн донъяла ике миллионға яҡын башҡорт йәшәй икән, башҡорт телен өйрәнергә һәм яҡларға кәрәк. Йәмғиәтте глобалләштереү шарттарында башҡорт теле рус теле яғынан да, инглиз теле яғынан да ныҡ баҫым кисерә. Ләкин һәр бер тел - донъя мәҙәниәтенең бер күрһәткесе, һәм улар яҡлауға мохтаж. Башҡорт телен ҡурсаларға, яҡларға, йәшәргә ярҙам итергә кәрәк", - тип әйтеүенән һуң ғына ла башҡорт телен өйрәнеүҙә бер ниндәй ҡаршылыҡтар тыумаҫҡа тейеш кеүек ине. Әммә беҙ бөгөн кире күренеш күҙәтәбеҙ: туған телдәр уҡыу пландарынан юҡҡа сыға бара, туған телдәргә ҡаршы ниндәйҙер сәйәсәт алып барыла, ата-әсәләр һәм башҡа предмет уҡытыусыларының ризаһыҙлығын да тоябыҙ. Туған телдәрҙе уҡытыу туған тел уҡытыусыларына ғына кәрәк булып сығамы икән ни былай булғас?

***Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов үҙенең сығыштарында башҡорт теленә гел ыңғай мөнәсәбәтен белдерә. Уның: "Бөгөн донъяла ике миллионға яҡын башҡорт йәшәй икән, башҡорт телен өйрәнергә һәм яҡларға кәрәк. Йәмғиәтте глобалләштереү шарттарында башҡорт теле рус теле яғынан да, инглиз теле яғынан да ныҡ баҫым кисерә. Ләкин һәр бер тел - донъя мәҙәниәтенең бер күрһәткесе, һәм улар яҡлауға мохтаж. Башҡорт телен ҡурсаларға, яҡларға, йәшәргә ярҙам итергә кәрәк", - тип әйтеүенән һуң ғына ла башҡорт телен өйрәнеүҙә бер ниндәй ҡаршылыҡтар тыумаҫҡа тейеш кеүек ине. Әммә беҙ бөгөн кире күренеш күҙәтәбеҙ: туған телдәр уҡыу пландарынан юҡҡа сыға бара, туған телдәргә ҡаршы ниндәйҙер сәйәсәт алып барыла, ата-әсәләр һәм башҡа предмет уҡытыусыларының ризаһыҙлығын да тоябыҙ. Туған телдәрҙе уҡытыу туған тел уҡытыусыларына ғына кәрәк булып сығамы икән ни былай булғас?***

**(Дауамы 10-сы биттә).**

***✓ Бөтөн указ, закон, бойоroҡтар Мәскәүҙән килә икәнен барыһы ла белә ул, ләкин Мәскәүҙән килгән һәр документ урындағы шарттарға, урындағы закондарға ҡулайлаштырылырға, тейешле документтар эшләнергә тейеш бит.***



(Башы 8-9-сы биттәрҙә).

**Рифат Риф улы:** Мәғариф хеҙмәткәрҙәренең Стәрлетамаҡта үткән август кәңәшмәһендә БР Президенты ауыл мәктәптәренә теймәҫкә, уларҙы япмаҫҡа, тине, ә ғәмәлдә иһә киреһенсә эшләнеләр. Бында ла шулай, законда бер төрлө яҙыла, ә уның үтәлешен күҙәтеүсе юҡ. Икенсе яҡтан ҡараһаҡ, ата-әсәләр булһынмы, уҡытыусылармы - беҙ бит үҙебеҙ ҙә бер ҡайҙа ла ярҙам һорап мөрәжәғәт итмәйбеҙ. Шул уҡ прокуратура, судтар, балаларҙың хоҡуҡтарын яҡлаусы инстанциялар, күҙәтеүсе органдар бар ҙа инде. Прокуратура һуңғы йылдарҙа мәктәптәрҙе төрлө яҡлап тикшереп, нисек штраф һалырға белмәй йонсоғансы, закондарҙың үтәлешен тикшерһә, файҙалыраҡ булыр ине.

**► Яңы федераль дәүләт стандарттары әле генә һанап үтелгән закондарға яраҡлаштырылмаған икән, тимәк, уны урындағы дәүләт органдары, иң тәүге сиратта, республиканың Мәғариф министрлығы ҡарарға, үҙ аңлатмаларын, тәҡдимдәрен индерергә тейеш түгелме һуң? Бәлки, уҡытыуҙағы буталсыҡлыҡтар шунан да киләлер?**

**Эльза Юрис ҡыҙы:** Элек Мәғариф министрлығы уҡыу йылы башында тәҡдим хаты ебәрә ине, быйыл ул хат булманы. Тимәк, дәүләт телен уҡытыу үҙ ағышына ҡуйылды. Яңы федераль дәүләт стандарттарына әйләнеп ҡайтҡанда, уның буйынса былтыр беренсе кластар башҡорт дәүләт телен уҡыманы, быйыл икенсе кластар ҙа уҡымай. Йыл һайын бәрәр параллелдә башҡорт дәүләт теле юҡҡа сыға барһа, башҡорт телен дәүләт теле буларак өйрәнеү закон тарафынан ҡаралһа ла, ҡағыҙҙа ғына тороп ҡаласаҡ, тигән һүҙ. Ә бит күрше Татарстан, Бүрәт, Яҡутстан республикаларында дәүләт телдәре хатта бишәр сәғәт уҡытыла. Балалар баҡсалары буйынса ла эштәребеҙ маҡтанырлыҡ түгел. Балалар баҡсаларында башҡорт дәүләт теле индерелгән, уҡытылған ерҙән бөтөрөлдө. Ә бит бала телде ни тиклем иртә өйрәнә башлай, шул тиклем яҡшыраҡ. Әлеге лә баяғы күрше Татарстанды миҫалға килтерһәк, унда балалар баҡсаларында дәүләт телдәрен өйрәнеү буйынса махсус программа эшләй. Бәлки, законда ҡаралмаған, тип, ойошторолған эште юҡҡа сығарғансы, киреһенсә, уҡытыуҙы законлаштырыу мөмкинлеген ҡарарға кәрәк булғандыр?

**Гүзәл Иштимер ҡыҙы:** Мәғариф министрлығы беҙгә дүрт төрлө уҡыу планы тәҡдим итә. Беренсеһе - милли мәктәптәр, икенсеһе - төрлө милләтле уҡыусылар уҡыған мәктәптәр, өсөнсөһө - рус мәктәптәре, дүртенсеһе - башҡа милләттәр өсөн. Өфө ҡалаһының күп мәктәптәрендә уҡыусыларҙың милли составы төрлөсә. Шулай булғас, беҙ икенсе уҡыу планын һайларға тейеш инек.

***Элек Мәғариф министрлығы уҡыу йылы башында тәҡдим хаты ебәрә ине, быйыл ул хат булманы. Тимәк, дәүләт телен уҡытыу үҙ ағышына ҡуйылды. Яңы федераль дәүләт стандарттарына әйләнеп ҡайтҡанда, уның буйынса былтыр беренсе кластар башҡорт дәүләт телен уҡыманы, быйыл икенсе кластар ҙа уҡымай. Йыл һайын берәр параллелдә башҡорт дәүләт теле юҡҡа сыға барһа, башҡорт телен дәүләт теле буларак өйрәнеү закон тарафынан ҡаралһа ла, ҡағыҙҙа ғына тороп ҡаласаҡ, тигән һүҙ. Ә бит күрше Татарстан, Бүрәт, Яҡутстан республикаларында дәүләт телдәре хатта бишәр сәғәт уҡытыла. Балалар баҡсалары буйынса ла эштәребеҙ маҡтанырлыҡ түгел. Балалар баҡсаларында башҡорт дәүләт теле индерелгән, уҡытылған ерҙән бөтөрөлдө.***

Әммә ҡайһы бер мәктәптәр туған телдәрҙе булмаған беренсе планды алды һәм хәҙер улар туған телдәрҙе мәктәп компонентына күсереп, йә түңәрәк, йә факультатив рәүешендә генә өйрәнә. Быйыл уҡыу планын ҡабул иткән саҡта күп директорҙар менән һөйләшергә тура килде. Балаларҙың тел өйрәнеүгә булған хоҡуғын боҙмайбыҙ, тип әйтәһегеҙ, ә ысынында бит боҙаһығыҙ, сөнки закондарҙы бер кем дә юҡҡа сығармаған", тием. "Ысынлап та шулай шул, беҙгә уларҙы нисек әйтәләр, шулай эшләйбеҙ, ни эшләп министрлыҡ өндәшмәй һуң?" тип аптырай директорҙар. Бөгөн башҡорт теле уҡытыусыларына директорҙар менән ошо кимәлдә һөйләшеүҙәр алып барырға һәм талаптар ҡуйырға кәрәк.

Башҡорт телен өйрәнеү өлкәһендә булған кире күренештәр тураһында һөйләүҙән ҡурҡырға, уларҙан мәктәптә йәшеренеп кенә ҡалырға ярамай. Шул уҡ интернетта, шул уҡ ата-әсәләр йыйылышында, шул уҡ директор һәм завуч кабинетында әйтергә кәрәк был турала. Өндәшмәй ултырғандан проблема ҡабарып, идара итә алмаҫлыҡ процеска әйләнеүе ихтимал. Бөгөн беҙ үтә һаҡҡа әйләндек, бәлки, ана шулай һөйләшеү етмәгәнгә һәм аңлатыу эше алып барылмағанға күрә ҡайһы бер ата-әсәләр башҡорт теленә кире ҡараштаһлыр.

**Рифат Риф улы:** Яңы федераль дәүләт стандарттары нимә инде ул - уҡытыусы мәктәпкә ниндәй юл менән килгән, ул артабан да шул юл менән киләсәк. Уҡытыусы әле нисек уҡыта, ул шулай уҡытасаҡ. Юлына бөгөн ағас, иртәгә таш, иртәнән һуң асфальт түшәһәләр ҙә, ул юл шул уҡ булып ҡаласаҡ. Быларҙың урынына йәлап ҡына мәктәптәрҙең матди-техник базаһын нығытһалар, яҡшыраҡ булыр ине. Тағы ошолай барһа, ун йыл самаһынан беҙҙең мәғариф юҡҡа сығасаҡ. Шунан һуң был федераль дәүләт стандарттары ла яңылыш булған, тип әйтәсәктәр, бәлки, БДИ-ны ла шундайыраҡ яҙмыш көтәләр. 30-сы йылдарҙа белемде күтәреү өсөн ауылдар буйлап йөрөп, балаларҙы йыйып уҡытҡандар бит, беҙ шуға әйләнеп ҡайтырға мөмкинбеҙ.

**Гүзәл Иштимер ҡыҙы:** Әлеге ваҡытта, оптималләштереү, тип, күп мәктәптәрҙә башҡорт теле дәресе төркөмдәргә бүлмәй уҡытыла. Ә рус теле, сит тел, информатика дәрестәре бүлеп уҡытыла. Күрәләтә ситләтеү түгелме ни был! Әгәр бөгөн һөҙөмтәле булмаған сығымдарға иң беренсе туған телдәрҙе индерәләр икән, беҙ эшебеҙҙән ниндәй һөҙөмтә көтә алабыҙ? Тағы бер ҙур проблема - туған телдәр буйынса директор урынбаҫарҙары ставкаларын ҡыҫҡартып бөттөләр. Ә бит алты йыл эсендә ошондай урынбаҫарҙарҙан бынамын тигән кадрҙар үҫеп сыҡҡайны, хатта директор булып вазифа баҫҡысынан күтәрелеүселәр ҙә бар.

**Гөлназ Әнүәр ҡыҙы:** Үкенескә күрә, бөгөн сит телдәр өйрәнеүгә бар шарттар тыуҙырыла, ә дәүләт теле өсөн - юҡ. Беҙ Башҡортостанда йәшәгән 100-ҙән ашыу милләт вәкиле тураһында ла хәстәрләйбеҙ, тик республиканы барлыҡҡа килтереүсе халыҡтың теле тураһындағы хәстәрлек иң аҙаҡҡа ҡала, аҡса булһа, теләк булһа ғына башҡорт теленә бер аҙ иғтибар күрһәтелә. Уҡыу планының аңлатмалы яҙмаһында СанПиН талаптары буйынса технология, сит телдәр, информатика төркөмдәргә мотлаҡ бүленә, ә дәүләт теле дәресен финанс мөмкинлектәр булғанда ғына бүлергә тәҡдим ителә. Беҙҙә бөтөн шарттар уҡыусы өсөн булырға тейеш. Улай булғас, ни өсөн дәүләт телен өйрәнгәндә уҡыусының хоҡуғын ҡыҫалар?

**Рифат Риф улы:** Мин милли мәктәптә эшләйем, шуға ла хәлем бер аҙ яҡшыраҡтыр ҙа. Шулай ҙа рус мәктәбендә эшләүҙең ауырлығын беләм, гимназияға тиклем ябай ҡала мәктәбендә белем бирҙем. Әммә бөгөн башҡорт теленә булған ҡараш милли мәктәптәрҙә лә шәптән түгел, сөнки мәктәп администрациялары, район идаралыҡтары, республика Мәғариф министрлығы мөнәсәбәтенә бәйле бит барыһы ла. Унан һуң, башҡа предмет уҡытыусылары ла, БДИ-ға әҙерләнергә былай ҙа ваҡыт етмәй, нимәгә ул башҡорт теле, тип ҡыҫҡырып әйтә. Профилле уҡытыуға күсәм, тип, милли мәктәптә лә 10-11 кластарҙа башҡорт теле дәрестәрен ҡыҫҡартып бөттөк бит инде.

**Гөлназ Әнүәр ҡыҙы:** Башҡа предмет уҡытыусыларының теләктәшлеге кәрәк шул беҙгә. Бер миҫал ғына килтерәйем әле. Класта, ғәҙәттә, БДИ-нан ҡурҡып, башҡорт та, татар милләтле балалар ҙа рус туған теленә ултырырға тырыша. Быйыл мәктәпкә бик шәп рус теле уҡытыусыһы килде. Дәресендә татар, башҡорт милләтле уҡыусылар араһында, үҙ туған телегеҙҙе өйрәнегеҙ, беҙ был дәрестә рус халҡының мәҙәниәтен өйрәнәбеҙ, баснялар иждад итәбеҙ, бер ниндәй ҙә БДИ-ға әҙерлек юҡ бында, тип аңлатыу эше үткәргән. Уларҙың ата-әсәләренә яңынан ғариза яҙып алып килергә тура килде. Унан һуң, ата-әсә һәм класс етәксеһенең дә аңлауы һәм беҙҙең менән бер һүҙҙән булыуы кәрәк.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Сентябрҙә Өфөләге ете районддың да башҡорт һәм татар теле уҡытыусылары килеп тыуған хәлгә асыҡлыҡ индереү, үҙҙәренең хәлен белгертеү һәм фекерҙәре менән уртаҡлашыу өсөн түңәрәк ҡорҙарға йыйылды. Һөйләшеүҙәрҙә Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты ағзалары, шулай уҡ һәр район башҡорттары ҡоролтайҙары рәйестәре ҡатнашты. Әлбиттә, был ҡорҙарҙағы һөйләшеүҙәр ниндәйҙер мәсьәләне хәл итә алмай ине, уҡытыусылар үҙҙәренең мәктәбендәге дәүләт һәм туған телдәрҙе уҡытыу буйынса хәл-торошто, зарын ғына еткерҙе һәм һәр береһе "Ниңә улай килеп сыға ул?" тигән һорауҙы ғына ҡабатланы. "Ниңә улай?" тигән һорау Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты ултырышында мәғариф министры Әлфис Ғаязовҡа ла бирелгәйне. Ул яуап итеп, яңы стандарттар тураһында һөйләне, барыһы ла Мәскәүҙән килә, тип аҡланды. РФ Дәүләт Думаһы депутаты Сәлиә Мырҙабаева әйтеүенсә, бөтөн указ, закон, бойоroҡтар Мәскәүҙән килә икәнен барыһы ла белә ул, ләкин Мәскәүҙән килгән һәр документ урындағы шарттарға, урындағы закондарға ҡулайлаштырылырға, тейешле документтар эшләнергә тейеш бит. Министрлыҡтарҙың дәүләт функцияһы ошо. Бына ошо функцияны үтәйме һуң бөгөн министрлыҡ? Үтәһә, ни өсөн дәүләт һәм туған телдәр уҡытыу буйынса шул тиклем буталсыҡлыҡтар килеп сыҡты? Был һорау мәғариф министрына Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты ағзалары тарафынан да, уҡытыусылар, ата-әсәләр тарафынан да бирелде һәм улар һаман да яуап көтә.**

**Ләйсән НАФИҠОВА**
**яҙып алды.**

*ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ*

# ҮҪТЕРГӘНЕҢДЕ...

## арзан хаҡҡа һатма

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



**Рәйлә ФӘСХЕТДИНОВА, эшҡыуар:** Республикабыҙҙа шәхси эшҡыуарлыҡтың насар үҫешеүе борсой мине. Административ кәртәләр, коррупция халҡыбыҙҙың эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнеүен тотҡарлауға төп сәбәп булып тора. Төбәгебеҙҙә айырыуса ер мәсьәләһе ҡатмарлы. Ябай башҡорт эшҡыуарына, мәҫәлән, эшен йәйелдереү өсөн ер алыуға ғына ла әллә күпме кәртәләр аша үтергә кәрәк була. Башҡортостан биләмәһенең күпселек өлөшө урындағы халыҡ ҡулында түгел, ә мәскәүҙәрҙең милкенә әйләнгән. Өфө, Стәрлетамаҡ ерҙәре предприятиелары менән бергә бөтөнләй тиерлек Мәскәү эш-

**Йәштәрҙең ижади энергияһы, инициативаһы, әүҙемлеге, уларҙың күңелендәге ут, көс театрҙы ысынбарлыҡ менән тоташтарып тороусы еп, тигәндәрен ишеткәнегеҙ барҙыр. Ысынлап та, үҙенең һөнәре эсенә йомолоп, тормоштан ситләшергә өлгөрмәгән йәш актер аша театрҙың йөрәгенә йәнләндергес, рухландырғыс, дәртләндергес тере һут ағып инә түгелме һуң? Ошо ябай ғына хәҡиҡәтте яҡшы аңлаған театрҙар сәхнәһендә тәжрибәле оло быуын актерҙары янында йәш актерҙарға урын бирелә, улар шул рәүешле бер-береһен тулыландырып йәшәй. Бөгөнгө ҡунағыбыҙ ҙа ошондай өмөтлө, йәш актерҙарҙың береһе. Күптәр уны Мостай Кәримдең "Ай тотолған төндә" трагедияһындағы Аҡъегет һәм башҡа ролдәре аша таныйҙыр. Актер булыу өсөн уңыш һәм осраҡтың ихтыяры мөһим, тиҙәр, был ысынлап та шулаймы? Шәхес булараҡ үҫешеү, сәнғәт донъяһында үҙ урыныңды табыу өсөн актерға таланттан тыш тағы нимәләр кәрәк? Ошолар һәм, ғөмүмән, театр, тормош һәм кешеләр тураһында Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры актеры Руслан ХАЙСАРОВ менән әңгәмәләшәбеҙ.**

# ТАМАШАСЫНЫ УЙЛАНДЫРЫУ - быма был бурыс, исмаһам!



## Уңыш ғәли йәнәптәре

Мин Күгәрсен районы Бикес ауылында тыуғанмын. Туғандарым, олатай-өләсәйем, атай-әсәйем әле лә шунда йәшәй. Әсәйемдең ғаиләһендә биш ҡыҙ бала үҫкән, шуға ла ғүмер буйы малай һөйөү теләге менән янған олатайым, мин тыуғас, үҙенең бар хәстәрен, иғтибарын миңә йүнәлтә. Шуға мин үҙемде олатай малайы тип иҫәпләйем. Сәнғәткә һөйөү бәләкәйҙән килә, Салауат, Сибай театрҙарының гастролдәргә килеүе, артистарҙың йыш ҡына беҙгә фатирға төшөүе хәтергә уйылып ҡалған. Әсәйемдең туғандары барыһы ла моңло йырсылар, ә атайым гармунда яҡшы уйнай. Артист тормошон һайлауыма ошоларҙың да йоғонтоһо булғандыр. Үҙем гитарала уйнайым һәм әлеге мәлдә ирен гармунында уйнарға өйрәнәм. Гитара - яңғыҙ булғанда, бошонҡо саҡтарҙа күңелде күтәреүсе иң яҡын дуҫым. Шулай уҡ Есениндың, Рәми Ғариповтың шиғырҙарын яратам.

Сәхнәлә алтынсы миҙгел уйнайым. Заһир Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт академияһын тамамлағас, курсташтарым менән Стәрлетамаҡ башҡорт дәүләт театрында бер миҙгел эшләнем. Шунан Башҡорт дәүләт академия драма театрына саҡырҙылар. Грецияла Тиха - Уңыш Аллаһы бар, ул ни өсөндөр артыҡ билдәле лә түгел. Актер өсөн бына ошо Уңыш ғәли йәнәптәренең һирәк булһа ла һинә йылмайыуы шарт. Был бигерәк тә актер һөнәрендә үҙеңде табыу, ысын актер булыу өсөн кәрәк, сөнки һәр осраҡта ла талант ҡына бар нәмәне хәл итмәй. Уңышлы булыу өсөн кәрәкле ваҡытта кәрәкле урында булырға кәрәклеген дә беләм. Баш ҡалаға, төп театрға эшкә күсеүем, спектаклдәрҙә ҙур ролдәр башҡарыу мөмкинлеге тыуыуын мин ана шул уңыштың минең яҡҡа боролоуы тип ҡабул итәм.

## Театр - күмәк ижад

Беҙҙе, театр - ул күмәк ижад, тип өйрәттеләр. Спектаклдең нисек килеп сығасағы, ысынлап та, режиссерҙан да, актерҙарҙан да, рәссамдан да һәм башҡаларҙан да тора. Беҙҙең һәммәбеҙ ҙә берҙәй ижад итәбеҙ. Шулай ҙа актер, бигерәк тә сәхнәгә яңы баҫҡан йәш актер өсөн режиссерҙың уны кәрәкле йүнәлешкә төшөрөп ебәреүе бик кәрәк. Һинең актер булараҡ үҫешеңдә тағы бер мөһим нәмә бар: ул режиссерҙың һиңә һәм һәләтеңә булған ышанысы. Башҡорт дәүләт академия драма театры режиссеры Айрат Әхтәм улы Абушахмановҡа рәхмәт, ышаныс белдереп, ул минең үҙемә булған ышанысымды арттырҙы.

Театрға килгәс, Мөхәмәтша Буранғоловтың "Шәүрәкәй" спектаклендә Сураҡай ролен бирҙеләр. Йәшермәйем, ауыр роль булды, башыма, кире Стәрлетамаҡҡа ҡайтып китәйемме икән, тигән уйҙар ҙа ингеләй торғайны. Ниндәйҙер ҡыйынлыҡты үтмәйенсә, ғүмерҙең киләһе баҫҡысына менеп булмайҙыр, мин дә күңелемдә булған был ҡаршылыҡтарҙы хеҙмәттәштәремдең кәңәштәре, ярҙамы менән үттем, уларҙың һәр береһенә рәхмәтлемен. Ғөмүмән, был театрҙағы ижадҡа булған ҡараш оҡшай миңә - унда ирек тә, үҙеңдең һүҙеңде әйтеү, уйлағандарыңды тормошҡа ашырыу мөмкинлеге лә бар. Шәхси ролдәргә килгәндә, уларҙы тамашасы иғтибарына сығарғансы, әллә күпме эҙләнергә тура килә. Беҙ тере кешеләрҙе уйнайбыҙ. Уларҙы йомаҡ кеүек сисеү, үҙеңдең аҡылың менән йәшәтеү, нимәгәлер өйрәнеү, бергәләп нимәләр кисереү - ул ғәйәт ҡыҙыҡлы эш.

Бөгөн башҡорт театры күтәрелеш осоро кисерә, тип уйлайым. Беҙҙең театр миҫалында ғына алып әйткәндә лә, репертуар жанр йәһәтенән байый, яңынан-яңы спектаклдәр ҡуйыла. Үткән миҙгелдә сәхнәгә сыҡҡан Х. Мөҙәрисованың "Бәхет хаҡы" музыкаль мелодрамаһына билеттар алдан уҡ һатылып бөттө. Уның йырлы спектакль булыуы, Фидан Ғафаров кеүек барыһының да яратҡан актерҙары уйнауы тамашасыны йәлеп итә. Рәми Ғариповтың тормошона, ижадына арналған "Февраль. Буран.." спектакле залдарҙы шығырым тултырҙы. Рәми ағайҙың аяныслы яҙмышымы, ялҡынлы шиғырҙарымы, халҡы яҙмышы өсөн үҙен аямауымы, бәлки, уның исемелер, оло уңышҡа килтерҙе.

## Донъя сәнғәтендә - үҙ урыныбыҙ

Башҡорт театры өсөн Мостай Кәрим трагедияһы, донъя театрҙары өсөн "Гамлет" кеүек уҡ, философик материал, уға режиссерҙар үҙҙәре был әҫәрҙең тәрәнлеген аңлағас ҡына тотоналыр ул. "Ай тотолған төндә" трагедияһы беҙҙең театр сәхнәһендә быға тиклем ике тапҡыр ҡуйылған. Тик әҫәр һәр ваҡытта ла заманға ауаздаш булырға тейеш. Әгәр ҙә Айрат Абушахманов уны элеккесә итеп, тирмәләр ҡороп, бер үк идея һалып сәхнәләштерһә, тамашасы уны ҡабул итмәҫ ине. Спектаклдең быға тиклем булған варианттары милли театрҙың художестволы һүҙ йәһәтенән үҫешен күрһәтеп торһа, бөгөн сәхнәлә барған "Ай тотолған төндә" башҡорт театрының донъя драматургияһында, донъя театрында, донъя сәнғәтендә үҙ урыны бар икәнен күрһәтте, тип уйлайым. Бөгөнгө ир - ҡатынды, ҡатын - ирҙе, ул - иңәне, ата - ҡыҙҙы танымаған ваҡытта, уланығыҙ, ҡырын эш ҡырҡ йылдан һуң да беленә, тип әйтелгән кеүек унда. Аҡъегет роле эмоциональ яҡтан уйнауы ауыр булған ролдәремдең береһе, спектаклдән ике-өс сәғәт алда театрҙың аулаҡ ҡына берәй мөйөшөндә ултырып, ҡабатлап алам, сөнки был роль уйнаған һайын яңыраҡ, икенсерәк килеп сыға. Аҡъегет - саф мөхәббәт, азатлыҡ өсөн бөтөн ҡанундарға ҡаршы сыҡҡан образ. Ошоноң менән ул үҙен юҡҡа сығарыу өсөн дә юл аса. Ирекһеҙҙән, йәмғиәткә ундай ҡорбандар кәрәкме икән, тигән һорау ҙа тыуалыр тамашасы күңелендә. Ә миңә ул рухы менән шул тиклем яҡын роль, сөнки шулай күндәм генә булып йәшәргә өйрәнгәнбеҙ инде, тигән аҡланыуҙарҙы бер ҡасан да ҡабул итә алмайым. "Рухтарҙы бахыр иткән ҡоллоҡ яман" тигән репликамды залдағы халыҡтың күҙҙәренә ҡарап, уянығыҙ, ҡолдар булмағыҙ, тип әйтәм. Аҡъегет, Рәми ағайҙар кеүек кешеләр тормошта күп булмайҙыр ҙа, сөнки үтә көслө кеше генә үҙен башҡалар өсөн ҡорбан итә ала. Бына шуның өсөн дә Аҡъегет миңә үтә ҡәҙерле, уға мин әле лә күп көс һәм түҙемлек һалам. Ирекқә ынтылыу, халыҡты уятыу, хаҡ иман юлына баҫтырырға тырышыу минең тағы бер геройыма - Туфан Миңнуллиндың "Мулла" спектаклендәге Әсфәндийәргә лә хас.

## Сит ил тәжрибәһе лә үҫтерә

Мин төрлө жанрҙарҙа ғына түгел, ә төрлө ил авторҙары әҫәрҙәрендә уйнап ҡарауым менән дә бәхетлемен. Әлбиттә, милли драматургияны уйнауы еңелерәк, сөнки унда һинә барыһы ла таныш, унда һинең үҙең бар, һин унда милли асылыңды күрһәһең, булмышыңды тояһың. Сит ил яҙыусыһы әҫәрендә былар юҡ, унда һинә ят булған донъя, характерҙар. Шунан сит ил авторы әҫәре тәүҙә оригиналдан рус теленә, һуңынан башҡорт теленә тәржемә ителә, һөҙөмтәлә, төп мәғәнә юғала төшә. Ошо йәһәттән бер аҙ ауырлыҡтар тыуҙырһа ла, башҡа ил драматургияһын сәхнәләштереү театр өсөн дә, тамашасылар өсөн дә мөһим һәм кәрәкле, бигерәк тә академик театр уларҙан баш тартырға тейеш түгел. Был әҫәрҙәр актерҙарҙы ла үҫтерә тип уйлайым.

Мин француз режиссеры Стефани Лоик менән эшләгән ваҡыттарҙы әле лә иҫләйем. Әйткәндәй, Р. Вальсерҙың "Бенжамент институты" әҫәрендә төп роль - Якоб фон Гюнтон да азатлыҡ күрәшсеһе. Был спектаклде эшләүе беҙҙең театр актерҙары өсөн ҙур тәжрибә булды. Унда, тамашасы иғтибар итһә, беҙ барыбыҙ ҙа бер үк хәрәкәттәр эшләйбеҙ, бергә ауыҙ асыу, бергә күҙҙәрҙе йомоу - быларҙың барыһы ла күп физик көс талап итте. Киплингтың әҫәре буйынса ҡуйылған "Маугли" әкиәтен дә балалар яратты. Мин уны Башҡорт академия драма театры сәхнәһендә спектакль итеп күрергә теләр инем, сөнки уның нигеҙендә ятҡан идея ла бөгөнгө көн өсөн әһәмиәтле. Заман ниндәй генә булмаһын, ауырлыҡтар осрағанда ла, еңел тормошта ла кеше булып ҡалыуы, ай-һай, еңел түгел.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Йәш актерҙар - улар ысынлап та башҡасараҡ. Театр ҡуйған шарттарға яраҡлашып, уның законлары менән йәшәһә лә, был йәштәрҙә азатлыҡ, иреклек үлсәме икенсерәк икәне тойола. Ваҡиғаларға буйһонмауҫанлыҡ, булдыҡлылыҡ, яҙмышты һынау һәм уны үҙгәртеүҙән ҡурҡмау, үҙ баһаңды белеү, ғүмер ҙә, яҙмыш та бер икәнен хәтерҙә тотоу, тамашасыны уйланырға саҡырыу - бөгөнгө театрҙа ижад итеүсе актер тап ошо сифаттарға эйә булырға тейештер ул, моғайын. Һәр хәлдә, Руслан Хайсаров менән һөйләшеүҙән ошолар аңлашыла.**

**Ләйсән НАФИҠОВА**
**әңгәмәләште.**

ҡыуарҙарына күсеп бөттө. Был осраҡта милли эшҡыуарлыҡтың үҫеше хаҡында ниндәй һүҙ булыуы мөмкин? Урындағы етәкселәр ҙә үҙ эшҡыуарҙарыбыҙҙы күтәрергә, уларға ярҙам итергә бик атлығып тормай. Үҙемдән генә сығып әйтәм: предприятиема йөҙҙән артыҡ хеҙмәтләндереү төрө индерелгән, яңы технологияларҙы тормошҡа ашырам, заманса ҡорамалдар һатып алам, бөтөн кимәлдәге конкурстарҙа алдыңғы урындарға сығам. Шуға ҡарамаҫтан, тотҡарлыҡтар яһала тора, инде нисәмә йыл тейешле ер майҙанын предприятиема беркетә алмайым.

Шулай ҙа эшҡыуарлыҡ өлкәһендә тәүге аҙымдар яһарға теләгән кеше уңышҡа өлгәшә ала. Был йәһәттән тәжрибә уртаҡлашып, йыш ҡына ауылдар буйлап йөрөргә тура килә. Әммә күҙәтеүем буйынса, башҡорт йәштәре эшҡыуарлыҡҡа бик һүлпән тотона. Ә бит тап ауыл тирәһендә, әлегә буш ятҡан ерҙәрҙә эш йәйелдерергә мөмкин. Өҫтәүенә, ауыл хужалығы өлкәһендә эшләүселәр хәҙер кәмей бара. Тик ауыл халҡы үҫтергән емеш-йәшелсәһен, ит-картуфын ситтән килгән алыпһатарҙарға арзан хаҡҡа һатып ебәреү ғәҙәтенән арынһын ине. Үҙең һатырға өйрән, бик булмаһа, берләшеп, һатыу менән шөғөлләнеүсе ойошма йәки кооперативтар ойошторорға мөмкин. Береһе баҡсала эшләй, икенсеһе тауарҙы баҙарға ташый, өсөнсөһө һата - шулай ҙа эшләргә була бит. Эшҡыуарлыҡты бәләкәй генә шөғөлдән башлап, яйлап-яйлап ҡына үҫтерергә, иң мөһиме, ауырлыҡтарҙан, ҡаршылыҡтарҙан ҡурҡмаҫҡа кәрәк.

**Мөнир ИҠСАНОВ яҙып алды.**

ИНТЕРНЕТТАН



# КӨҘГӨ БАЙЛЫҠТА...

## ҡарбуз ашап ҡалығыҙ

■ Ҡара шоколад ҡандағы насар холестерин кимәлен кәметә, ә яҡшы холестеринды күтәрә. Сан-Диего университеты ғалимдары үткәргән бәләкәй генә тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, ҡара шоколад составындағы флаванол матдәләре йөрәккә файҙалы. Тикшеренеүҙәрҙә 31 кеше ҡатнашҡан, уларҙың ҡайһы берҙәре 15 көн дауамында 51-әр грамм ҡара (70 процент какао), ҡайһылары аҡ (0 процент какао) шоколад ашарға тейеш булған. Ҡатнашыусыларҙың ҡан баҫымы, ҡан әйләнеше, липидтар циркуляцияһы, ҡандағы глюкоза кимәле даими тикшерелеп торған. Тестар күрһәтеүенсә, ҡара шоколад ашаусыларҙың "яҡшы" холестерин кимәле юғарыраҡ булып сыға. Ҡара шоколад йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәрен иҫкәртергә һәләтле булһа ла, тикшеренеүселәр уны артыҡ ашамаҫҡа кәңәш итә, сөнки уның калорияһы ла юғары.

■ Шлактар тураһында популяр әҙәбиәттә күп яҙылһа ла, ғилми әҙәбиәттә улар тураһында мәғлүмәт бөтөнләй юҡ. Таҙалыҡ "яратыусылар" әйтеүенсә, таш, лайла, ауыр металдар тоҙҙары организмда яйлап йыйыла. Һәм, был ни тиклем сәйер яңғырамаһын, организм уларҙан үҙаллы ҡотола алмай икән, шуға ла клизмалар, диеталар кәрәк, имеш. Әммә медицинала "шлак" тигән термин юҡ. Сеченев исемендәге Мәскәү Медицина академияһының гастроэнтерология клиникаһы профессоры Семен Раппопорт әйтеүенсә, "таҙартыу" тигән төшөнсә кеше организмына ҡарата ҡулланыла алмай. "Сөнки кеше - йорт түгел, унда бысраҡ йыйылмай" . Ошоға тиклем УЗИ, гастро- һәм колоноскопия бер кемдә лә шлак тапҡаны юҡ.

■ Афина университеты ғалимдары ике төркөм ҡатын-ҡыҙҙарҙы сағыштырып ҡараған. Беренсе төркөм 3 ай дауамында йүгергән, икенсеһе шәп итеп атлап йөрөгән. Һөҙөмтәлә, икенсе төркөмдәге ҡатын-ҡыҙҙар артыҡ килограмдарҙы күберәк ташлаған. Тикшеренеүселәр быны шулай аңлатҡан: кем йүгергән, улар күберәк көс юғалтҡан һәм көн дауамында йышыраҡ ял иткән һәм ашаған. Ә йәйәү йөрөүселәрҙең, киреһенсә, энергияһы ташып барған һәм улар ҡалған ваҡытын да әүҙем үткәргән. Бынан тыш, йәйәү йөрөгәндә көс мускулдарға, ә йүгергәндә быуындарға төшә. Бынан тыш, йәйәү йөрөү ҡан баҫымын да яйға һала. Стэнфорд университетының физиологтары юғары ҡан баҫымы менән яфаланған ҡатын-ҡыҙҙарға көнөнә йәйәү йөрөүҙе 9700 аҙымға еткерергә ҡушҡан. Алты айҙан һуң ханымдар ябығып, ҡан баҫымдары нормаға килгән. Ошондай уҡ экспериментты ирҙәрҙә лә үткәреп ҡарағандар. Унда 11 мең ир-егет ҡатнашҡан һәм көнөнә 10 мең аҙым һәр башлағандан һуң уларҙа инсульт һәм инфаркт хәүефе 2 тапҡырға кәмегән.

■ Ҡарбуз еңел үҙләштерелә торған тәбиғи шәкәрҙән, башлыса фруктоза һәм глюкозанан тора. Унда шулай уҡ В1, В2, С, РР витаминдары, фолий кислотаһы, каротин, пектин полисахаридтары, калий, магний, тимер, натрий, кальций, фосфор һәм башҡа микроэлементтар күп. Файҙалы матдәләрҙең былай бай ассортименты йөрәк-ҡан тамырҙары системаһына, ҡалҡан биҙенең эске секрецияһына, эсәк микрофлораһына яҡшы тәьҫир итә. Халыҡ медицинаһында ҡарбузды бөйөр һәм йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙары мәлендә шешенгәндә ҡулланалар. Уны урологик ауырыуҙар: цистит, нефрит, пиелонефрит ваҡытында ла ашарға кәңәш итәләр. Ҡарбузды диета ваҡытында ла ҡулланалар. Тимергә бай ҡарбуз анемиянан да ҡотҡара.

ИР-АЗАМАТ

**Ауылда эш булмағанлыҡтан, ҡалаларға ағыла йәштәр, гастарбайтерҙар "сословиеһы"ның һанын арттырып, сит тарафтарға тарала. Элек йәштәр күберәген Себер яҡтарына китһә, хәҙер Европаға, Америка ҡитғаларына ла күҙ төбәй. Ситкә китеүселәрҙең күбеһе унда күпмелер суммала аҡса туплап, тыуған яғына ҡайтып, шул аҡсаға үҙ эшен асырға ниәтләнә. Әммә сит илдә ҡутара аҡса алып ҡайтып, үҙебеҙҙә үҙ эшен асып, мандып киткәндәрҙе әлегә осратҡан юҡ. Ундайҙар ҙа барҙыр, әммә барыбер кеше үҙ илендә лайыҡлы йәшәр өсөн тәүҙә сит яҡта эшләргә тейешме һуң? Етмәһә, ситкә бәхет эҙләп китеүселәрҙе ир-егеттәрҙең тыуған яҡтарға табуттарҙа ҡайтыусылары ла арта бара һуңғы ваҡытта. Бер үк ваҡытта Урта Азия, Кавказ буйы республикалары, көнсығыш дәүләттәре халҡы, бигерәк тә йәш һәм урта йәштәрҙәге ир-азаматтар, шул уҡ гастарбайтерҙар сифатында беҙҙең төбәктәрҙә яулай. Беҙҙекеләр эш юҡ, тип ташлап киткән ерҙә улар эшен дә таба, үҙ бизнесын да ойоштора, үҙ милләтенең йәшәү мөхитен киңәйтә. Парадоксмы? Парадокс. Кемдер өсөн эшһеҙлектән күңеле ҡайтҡан урын башҡалар өсөн йәшәү, байлыҡ туплау сығанағына әүерелә.**

**Әммә эштәр улай уҡ хөрт тә түгел. Бигерәк тә һуңғы ике-өс йылда колхоздар һәм совхоздар "ожмахы" ҡабат әйләнеп ҡайтмаҫын тамам аңлаған ауыл йәштәре үҙ өйөндә үҙ эшен ойоштора башланы. Түбәндә уларҙың өсөһө хаҡында һүҙ бара.**

# ЯЙЫН ТАПҠАН - МАЙЫН ҠАПҠАН...

## йәки Ауылда ла үҙ эшеңде асырға була

### Башта эшләп ҡара...



**Йәш, көслө сағында кеше үҙенең ҡартлығының нигеҙ таштарын һала, тигән аңлау бар халыҡта. Бының ике йүнәлеше билдәле: тәүгеһе - ҡартайған сағында үҙеңде ҡарарлыҡ балалар тәрбиәләү, икенсеһе - үҙ эшеңде булдырыу. Беҙҙең 27 йәшлек геройыбыҙ Рәфис АБДУЛЛИН да ошондай бурыстарҙы йөкмәгән иңенә: ул бөгөн мебель цехы тотҡан эшҡыуар.**

Әбйәлил районының Амангилде ауылында тыуып үҫкән, урта мәктәптә белем алған, артабан Сибай ҡалаһындағы 24-се һөнәрселек училищеһына уҡыған. Рәфистең эшҡыуарлыҡ донъяһына аяҡ баҫыр алдынан үткән тормошон шулай бер-ике һүҙ менән генә тасуирлап булыр ине.

Һөнәрселек училищеһында уҡый башлаған та уҡ күңеленә яҡҡан һөнәрен табыуын аңлай Рәфис. Бер йыл эсендә ағас менән эш итеү "фән"ен һыу кеүек эсеп, ҡулына ҡыҙыл диплом ала. Шунан төрлө ерҙәрҙә ағас эшкәртеүсе һөнәре буйынса эшләй. Шул саҡта артабан белемен арттырыу зарурлығын да аңлап өлгөрә һәм 2007 йылда Магнитогорск дәүләт университетының дизайнерҙар әҙерләү факультетын тамамлаған, күпмелер ваҡыт ҡалала эшләп ала.

- Әллә Себергә сығып китергә инде, тигән икеле-микеле уйҙар минең дә башҡа инеп сыҡҡылаһы ул ҡайһы саҡта. Дуҫтар ҙа маҡтаптәмләп һөйләргә ярата ине ул яҡтарҙағы аҡса муллығын. Ниңәлер, мин ауылға ныҡыраҡ тартылдым. Ниңәлер, тиһәм дә, хәҙер аңланым - мине ағас эшкәртеү эше ауылда тотоп ҡалды, - ти егет, хеҙмәт юлы башланған осорға байҡау яһап.

Берҙән-бер көндә туғандары мебель етештереү оҫтаханаһы асырға тәҡдим итә уға. Кем күпме бирә ала, шул саҡлы аҡса йыйып бирәләр.

Әммә яңы ғына ҡаланан ҡайтып төшкән буласаҡ ағас оҫтаһы юғалып ҡала: "Туғандар бағлаған өмөттө аҡлармынмы? Бизнес юлына әле-әле генә аяҡ баҫҡан сағымда абынып йығылмаҫмынмы?". Былдай икеләнеп уйланыуҙар йәштәрҙең күбеһенең күңелен ҡорт кеүек кимерә шул. Ә шулай ҙа икеләнеүҙәренә батша булырға юл ҡуймай, тәүәкәлләргә була: эштең уң сығырына ышанмаусылар фекеренә иғтибар итмәй, туғандары йыйып биргән аҡсаға мебель етештереү цехы асып ебәрә егет. Райондың мәшғүллек үҙәгенән, шулай уҡ Башҡортостандың "Start-up" йәш эшҡыуарҙарға ярҙам программаһы буйынса алынған аҡсаға ике ҡиммәтле станок һатып алып, заказға йорт йыһаздары етештерергә тотона. Яйлап, Рәфис эшләгән йыһаздарға халыҡ иғтибар итә, заказдар ҙа күбәйә.

-Ауыр саҡта атайымдың "Эштән ҡурҡма, ни булһа ла булыр, башта һис юғы эшләп ҡара",тигән аҡылын тотоуым ярҙам итте. Күп тә үтмәй, ике егетте - Ильяс менән Йәмил исемле ауылдаш егеттәрҙе эшкә алдым. Улар ҙа тиҙҙән эшкә өйрәнеп китте. Заказдар килһә, иң тәүҙә мин компьютерҙа был әйберҙең һүрәтен һыҙам, һүрәт әҙер булғас, егеттәр ул һүрәтте ағастан һынландыра, - тип, серҙәре менән уртаҡлаша Рәфис.

Конвейер ысулы менән етештереү байтаҡҡа енелерәк булһа ла, егеттәр һәр заказды башынан аҙағына тиклем үҙенә бер төрлө итеп башҡара, уларҙың йыһаздары бербереһен ҡабатламай. Ошондай ижади эшләү заказсыларға ла, егеттәрҙең үҙҙәренә лә ҡәнәғәтлек тойғоһо килтерә.

- Бөгөнгө көндә үҙемдең күңеләмә майҙай ятҡылған эшем бар, шуның менән мин үҙемде бәхетле тоям. Киләсәктә эште тағы ла йәнләндерергә, өҫтәп тағы бер оҫтаны эшкә алырға һәм, әлбиттә, өйләнергә ине иҫәп, - ти Рәфис алдағы пландары менән уртаҡлашып.

**Илгиз ИШБУЛАТОВ.**
**Һүрәттә: Рәфис Абдуллин.**

### Быйма баҫыусылар тоҡомо

**Мин бала саҡта уҡ быйма баҫыу һөнәрен үҙләштергәйнем. Был шөғөлдө беҙҙең тоҡом, зат-зәүер борондан үҙ итә. Шуға күрә беҙҙә быйма баҫыу буйынса ғаилә династияһы тип тә әйтергә була. Өс малай үҫтек, барыбыҙҙы ла атай ошо һөнәргә өйрәтте. Быйма баҫыусылар династияһының дүртенсе быуыны булып торабыҙ. Ә хәҙер үҙебеҙҙең балаларыбыҙ, ейәндәребеҙ ошо эшкә оҫтара. Минең дә өс улым үҫте, бөтәһе лә үҙ теләге менән быйма баҫырға өйрәнде. Был һөнәр ҡаныбыҙға һеңгәндер инде, моғайын.**

Быйма баҫыу таҙа эш түгел. Тәүҙә һарыҡ йөнөн ағарғансы йыуырға, сүптән таҙартырға кәрәк. Әммә үҙ ҡулдарың менән яһаған әйберҙе күрергә ынтылыу бөтә ауырлыҡтарҙы онottора. Эште яратып эшләһән, ул көс-дәрт кенә бирә. Бер эш икенсеһен тарта, тигәндәй, олоғая килә башҡа эш-һөнәрҙәрҙе лә үҙләштерҙем. Быйманы аҡсаға ғына алыштырмайһың бит. Кемгәлер быйма баҫып бирәм, ул кеше үҙе белгән эштәре менән минә ярҙам итә. Ауыл ерендә былдай алыш-биреш эштәре күп инде ул. Шулай бер-беренән өйрәнәһең, тәжрибә менән уртаҡлашаһың. Тәҙәләш эштәренә, техниканы йүнәтергә, мәсьәлән, шулай оҫтарып кителде.

Әммә барыбер быйма баҫыу төп һөнәрем булып ҡала. Эштең күбеһен хәҙер балаларым башҡара. Маҡсатыбыҙ күп тауар етештереү түгел, аҡса артынан ҡыумайбыҙ. Заказдар буйынса ғына эшләйбеҙ. Йылына 100-150 пар быйма баҫыла. Кемгәләр йоҡа, йомшағыраҡ, кемгәлер ҡалын табанлы быйма кәрәк. Ғәҙәттә, уҡытыусыларға нескә, ҡупшы ғына быймалар кәрәк. Эшсе халыҡҡа йылы, ҡалын табанлы быйма баҫабыҙ. Бар эш ҡулдан башҡарыла, шуға сифаты ла юғары. Оҫтаханала аҡ, ҡара, һоро төҫтән тыш, башҡа төҫлө буяу ҙа

✓ *Башҡа кеше бешергән аҙыҡты ауыҙға алғанда һеҙ ул кешенең рухи донъяһын да йотаһығыҙ. Бешергән ризығы аша әрһеҙ ашнаҡсы һеҙгә үҙенең насар ғәҙәттәрен дә еткерә. Шуға ла үҙегеҙгә үҙегеҙ бешерегеҙ.*



бар, сөнки йыш ҡына аяҡ кейемен семәрләп, биҙәкләп тә ебәрәбеҙ.

Күп булмаһа ла, һарыҡ тотабыҙ, шуға күрә эштә үҙ малыбыҙҙың йөнөн файҙаланабыҙ. Етмәгәнен ауылдаштарҙан һатып алабыҙ. Заказсының үҙенең сеймалы менән баçһаҡ, уға бейма хаҡы ике тапҡырға осһоҙораҡҡа төшә. Әммә күптәр йөндөң сифатын, төрөн айыра белмәй. Яҙғы йөн, мәçәлән, быйма баçыу өсөн яраҡһыҙ, унан ойоҡ, бейәләй генә бәйләргә мөмкин.

Һөнәребеҙ быуындан-быуынға күсеп килгәс, тирә-яҡтағы халыҡ та беҙҙе яҡшы белә. Алыусылар беҙ баçҡан быйманы яратып кейә. Бер пар быйманы ун, ун биш йыл кейеүселәр бар. Быйма баçыу оçталығына өйрәнергә теләүселәр күп. Шуға күрә ҡул эше рәүешендә был һөнәр әле оҙаҡ йылдар һаҡланыр, тип уйлайым.

**Әдис НИҒМӘТУЛЛИН,**
**Салауат районы**
**Таймый ауылы.**

## Ситкә китеп, отолма

**Эшҡыуарлыҡ еңел эш түгел. Бының өсөн әллә күпме һөнәр, шөғөл асылына төшөнөргә кәрәк. Фермерлыҡ өлкәһендә күпмелер тәжрибә туплар алдынан төрлө йүнәлештә эшләп ҡараным.**



Башта ҡаҙ үрсеттем, аҙаҡтан һыйыр малын күбәйтеп, һөт һатыу менән шөғөлләндем, ат тотоп, ҡымыҙ етештереп тә ҡараным. Тора-бара һарыҡ үрсетеүгә туҡталдым. Өйләнгәндә туйға дүрт һарыҡ бүләк иткәйнеләр. Уларҙың тоҡомо йылдан-йыл артып торҙо, утыҙ башҡа еткәс, һарыҡ ите етештереү тураһында ныҡлап уйлана башланым. Минең өсөн һарыҡсылыҡ менән шөғөлләнеүе еңелерәк тә, табышлыраҡ та булып сыҡты. Беҙҙә һарыҡ үрсетеү килемле, ул ауылыбыҙҙың урынлашҡан урынына бәйле. Тирә-яҡты тауҙар уратып алған, һарыҡ малын йыл әйләнәһенә тибендә көтөп була. Һарыҡ итен һораусылар ҙа күп. Хужалыҡта әле дүрт йөҙләп һарыҡ бар, әммә һатып алыусыларҙың һорауын ҡәнәғәтләндереү өсөн был да аҙ. Баҙарға ла сығарып тормайым, һатып алыусылар үҙҙәре килеп алып ҡына торалар. Ҡорбан байрамында бигерәк тә һарыҡ һораусылар күп.

Малды ярым ҡырағай шарттарҙа үçтерәм. Беҙҙең яҡта көтөүлектәр күп. Һуңғы йылдарҙа ауылдарҙа малдар икеләтә-өсләтә кәмене. Был иһә көтөүлектәрҙе сүп баçыуына булышлыҡ итте. Һарыҡ йөнөн эшкәртә башлағас, мин ошо проблемаға килеп төртөлдөм. Йөндө сүп үләненән айырыуы бик ҡыйын. Шуға күрә малды хәҙер билдәле бер майҙанда ғына көтөргә тура килә. Һарыҡ йөнөн эшкәртеп, юрған тегеү, кейеҙ баçыу менән шөғөлләнә башланыҡ, аҡрынлап быйма баçыу эшен дә йайға һалырға ниәтләйем.

Һәр бер эштең үҙ ауырлығы бар. Ниндәй генә эшкә тотонма, һинең беләк көсөңдән тыш, ныҡышмалығың, түҙемлегең кәрәк. Ә инде ошо сифаттарын эшкә егергә ялҡаулаңып, кемдер бәхетте ситтән эҙләргә сығып китә икән, ул отмай, ә отола. Ситтә уға тағы ла күберәк һынауҙар үтергә тура килә бит. Шуға ла мин ир-егеттәребеҙҙе тыуған ерендә ҡалып, үҙ өйөндә үҙ йүнен йүнләргә саҡырам.

**Таһир ШАЯНОВ,**
**Шишмә районы**
**Биҡкол ауылы.**

*ХАТАЛАР ӨÇТӨНДӘ ЭШ*



# УН АЛТЫ ЙӘШЛЕК ҠАРТЛАС

## Вегетарианлыҡтың тәүге айҙары

**Берәй кеше вегетарианлыҡ юлына баçырға ниәт иткән икән, уға тәүге өс айҙа бик тә һаҡ булырға кәрәк. Ошо еңел булмаған юлға баçырға ҡарар итеүсегә бер нисә файҙалы кәңәш биргем килә.**

Тәү нәүбәттә үҙегеҙҙе уратып алған кешеләрҙән һаҡланығыҙ. Тәүге ике аҙнала улар һеҙҙән көлөп бер булыр. Ҡатынығыҙ, балаларығыҙ, туғандарығыҙ - барыһы ла һеҙҙе "дөрөç"йәшәү рәүешенә кире ҡайтырға саҡырыр. Гәзит-журналдарҙан иттең файҙаһы тураһында мәҡәләләр табып уҡытырҙар. Айырыуса иттең ирҙәр көсө өсөн мөһим булыуы хаҡында һөйләрҙәр. Һеҙ асыуланмағыҙ - һөйләгәндәрҙе шым ғына тыңлағыҙ ҙа, ризамын, тигәндәй, башығыҙҙы ҡаҡҡан булығыҙ. Сөнки был миçалдар - ҡайһы бер диетологтар тарафынан уйлап сығарылған буш һүҙ.

Ләкин былар иң ауыры түгел әле ул. Бер айҙан ҡатынығыҙ һеҙҙең "ахмаҡлыҡ" менән риза булмайынса, ҡайһы берҙә иртәнге, төшкө, киске ашһыҙ ҡалдырыр. Ҡатынды бит аңлап була: элек ул бөтә ғаилә өсөн генә аш-һыу бешерһә, хәҙер һеҙҙең өсөн айырым бешерергә тура киләсәк. Табын ҡорона күп итеп ҡунаҡтар саҡырһағыҙ, һеҙгә бары тик салат менән генә ҡәнәғәтләнергә тура киләсәк, сөнки һеҙҙең хаҡта иçкә төшөрөүсе лә табылмаясаҡ.

Түҙегеҙ: уңыштар юғалтыуҙар һәм ауырлыҡтар аша үтеп кенә яулап алына. Кәңәш шундай: үҙегеҙгә үҙегеҙ бешереп ашарға өйрәнегеҙ. Үҙегеҙ өсөн бешергән аштан да тәмлерәге һәм файҙалыраҡы булмаç. Ризыҡтың ҡиммәте ҡулланылған продукттарҙан ғына тормай, уның кем тарафынан, ниндәй уйҙар, кәйеф менән бешерелеүе лә бик мөһим. Ризыҡтың ниндәй булырын кешенең шәхси сифаттары, йәшәү рәүеше лә билдәләй. Башҡа бер кеше бешергән аҙыҡты ауыҙға алғанда һеҙ ул кешенең рухи донъяһын да йотаһығыҙ. Бешергән ризығы аша әрһеҙ ашнаҡсы һеҙгә үҙенең насар ғәҙәттәрен дә еткерә. Шуға ла үҙегеҙгә үҙегеҙ бешерегеҙ, ризыҡты ипләп кенә ауыҙ итегеҙ, һауыт-һабаны үҙегеҙ артынан үҙегеҙ йыйыштырып ҡуйығыҙ.

Бына инде ун һигеҙ йыл буйы мин шундай режим менән көн күрәм: иртәнге 5-тә торам, йүгерәм, һыуыҡ душ аçтында йыуынам, үҙемә һәм ғаиләмә ашарға бешерәм. Бешерергә тотоноу алдынан үҙ-үҙемдән: "Бөгөн мин нимә ашарға теләр инем?" - тип һорайым. Тәүге осорҙа организм кәтлиттәр генә һорай ине. Мин уға шулай тип яуап бирәм: "Итле ризыҡтарҙы башҡаса ашамайбыҙ, тип һөйләштек тә инде!". Ләкин барыбер эске тауышым үҙенекен тылҡый: "Юҡ, кәтлит теләйем!" - ти. Ярай, нисек тә булһа аңлашып, һөйләшеп, ҡыҙҙырылған картуфта туҡтала инек. Сәғәт 7-лә - иртәнге аш, 13-тә - төшкө аш, 17-лә киске аш. Ошо ҡанун әле лә һаҡланып килә. Тәүге өс йылда ике еңел аш ашай инем - 10-да һәм 15 сәғәттә. Еңел аш, тигәне шырпы ҡабы һымаҡ бутерброд, арахис, унлап фисташка, бер мандарин, ярты кишер. Әсе алма һәм апельсиндарҙы кәңәш итмәйем - улар ашҡаҙанды "ашай". Был минең шәхси фекерем генә. Бәлки, һеҙҙең өсөн улар файҙалы ла булыр. Тағы бер кәңәш: бер кәңәшемде лә теүәл үтәмәгеҙ. Уларҙың принцибы мөһим. Әлеге миçалда, мәçәлән, принцип туҡланыу ваҡытын тәртипкә һалыуҙа. Ҡалған ваҡытта һеҙ аҙыҡ тураһында бөтөнләйгә онотаһығыҙ. Һимеҙ кешеләр график буйынса туҡлана алмауҙан һәм ризыҡты йәйлап сәйнәргә өйрәнмәгәнлектән яфалана.

Был йәшәү этабының төп ҡануны - ризыҡты еренә еткереп, йәйлап сәйнәү. Йотҡандан һуң, аҙыҡтың ашҡаҙанға еткәнгә тиклемге юлын күҙәтегеҙ. Шунан ғына артабанғы киçәккә тотоноғоҙ. Тәүге осорҙа килеп сыҡмаһа, күңел төшөнкөлөгөнә бирелмәгеҙ. Гел генә теләһә нисек туҡланыуығыҙға организмығыҙ күнеп бөткән, яңылыҡты ул, әлбиттә, теләр-теләмәç ҡаршы аласаҡ. Ауыҙығыҙҙы контролгә алғас ҡына, бар ауырыуҙар ҡасыр, ҡурҡыу, асыуға аңығыҙҙа урын ҡалмаç. Ике йылдан аҙнаһына бер мәртәбә булһа ла һеҙ аңлы рәүештә туҡланырға өйрәнерһегеҙ. Яңғыҙығыҙ ашағанда уңыштарығыҙ ҙурыраҡ буласаҡ.

## Тән сәләмәтлегененең ҡайтыуы

Вегетарианға кәңәштәр китабын бер ҡайҙа ла осратҡаным булманы. Ит ашамаусыларға тәҡдим ителгән пособие йә Көнсығыш трактаты эҙләһәм дә, таба алманым. Бәлки, ундай халыҡтар өсөн айыҡ йәшәү рәүеше һәм вегетарианлыҡ меңъйыллыҡ тарихлы бөтмәç-төкәнмәç йола булғас, Көнсығыштың аҡыл эйәләре барыһына ла мәғлүм был темаға китап яҙмағандыр ҙа.

Әммә ләкин беҙҙең өсөн бындай йәшәү рәүеше сит булған өсөн дә мин үҙемдең вегетарианлыҡ тәжрибәм менән уртаҡлашырға булдым. Айныҡ йәшәү рәүеше, вегетарианлыҡ менән көн күргәндәрҙең киләсәге өмөтлө. Һуңғы йөҙъйыллыҡта Ер цивилизацияһы үҙенең үçешеүенең иң киçкен нөктәһенә килеп етте. Киләһе 20-50 йыл эсендә планетабыҙҙа климат ныҡ үҙгәрәсәк. Ошо арҡала күп йәнлектәр, кешеләр үләсәк. Ошо үҙгәрештәргә әҙер булыу өсөн беҙгә был донъяла йыйылған "йөктән" арынырға кәрәк. Мәçәлән, йыртҡыс булмаған хайуандарҙың - йылҡы, һыйыр, сусҡа итенән итенән баш тартыу. Иң яҡшыһы - бөтөнләй ит ашамау. Ихтыяр көстәре булғандарға рациондан йомортҡа, балыҡ, ыуылдырыҡты һыҙып ташларға кәрәк. Ошо кәңәштәргә ҡолаҡ һалһағыҙ, бөтөнләй икенсе кешегә әйләнәсәкһегеҙ! 70-90 йыл буйына ниндәйҙер тәртиптә йәшәү улай уҡ ҡыйын нәмә түгел дә инде.

**Самат МӨХӘМӘТЙӘНОВ,**
**философия фәндәре докторы.**
**(Дауамы бар).**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ЫСЫН ТОРМОШҠА СӘЙӘХӘТ

## Үҙ тәғәйенләнешеңде тап

**Тормошҡа аныҡ пландар ҡуймайынса һәм аныҡ маҡсаттарығыҙ булмайынса тороп, һеҙ йүнәлешен юғалтып, сикһеҙ диңгеҙ киңлегендә бушҡа тулҡын баçтырған карап хәлендә ҡаласаҡһығыҙ. Бындай тормош рәүеше эшкә һәләтлелекте генә төшөрөп ҡалмай, кешенең шәхси сифаттарын да кәметә, бәхет тә килтермәй, бер ниндәй ҡаҙанышҡа ла өлгәштермәй.**

Тормош мәғәнәһе - ул тормош маҡсаттарыңды һәм ынтылыштарыңды туплау. Ул кешенең асылында булып, һеҙҙе дәртләндерергә, һеҙҙең менән идара итеүсе фундаменталь принциптарҙы, хыялығыҙҙы, идеалдарығыҙҙы, теләктәрегеҙҙе дөрөç сағылдырырға тейеш.

Үҙегеҙ өсөн тормош миссиягыҙҙың мәғәнәһен формалаштырып, һеҙ артабанғы юлығыҙҙың йүнәлешен билдәләйәсәкһегеҙ. Тормоштан нимә алырға теләгәнегеҙҙе һәм йүнәлеш биреүсе принциптарҙы аныҡ белеп, эске тормошоғоҙҙо мәғәнә менән тултырһағыҙ, үҙ-үҙегеҙгә ышанысығыҙ артыр.

Миссиягыҙҙы билдәләү тулы тормош менән йәшәү мөмкинлеге бирер һәм үҙегеҙ һайлаған ҡиммәттәр йүнәлешендә һөҙөмтәле компас булып торор. Әгәр һеҙгә миссиягыҙға ҡаршы килгән берәй нәмә тәҡдим итһәләр, һеҙ уны шунда уҡ танып, унан баш тарта аласаҡһығыҙ. Әгәр миссиягыҙҙың төп өлөшө булып изгелек, тәрбиәлелек тора икән, үҙегеҙгә ҡарата дорфа ҡыланған кешегә уның кеүек үк яуап бирә алмайһығыҙ, сөнки был һеҙҙең миссиягыҙҙың төп ҡиммәттәренә ҡаршы килә. Тормошоғоҙҙан үкенеү кеүек аңлатманы алып ташлайһығыҙ, сөнки үҙегеҙ теләгәнсә эш башлайһығыҙ һәм берәү ҙә һеҙҙе уйығыҙҙан кире дүндерә алмаясаҡ. Һеҙ - суперәүҙемгә әйләнәсәкһегеҙ, үҙегеҙ һығымта яһап, һәр хәл-торошто контролдә тотасаҡһығыҙ. Үҙегеҙҙең принциптарығыҙҙы тормош үҙәгенә ҡуйып, фундаменталь принциптарығыҙға тап килгән тормош алып барасаҡһығыҙ.

Тормошоғоҙҙоң миссияһын билдәләүҙең бер нисә өçтөнлөгө:

а) тормош мәғәнәһен һәм уға йүнәлеш биреүсе дәүмәлдәрҙе асыҡлау;

б) ауырлыҡтар һәм шикләнеүҙәр тыуған осраҡта даими ҡаты еткселек;

в) даими дәртләндереп тороу һәм төп тормош ҡиммәттәренә күрһәтеп, йүнәлеш биреп торған "шәхси маяҡ";

г) ныҡлы, аныҡ тигеҙлек һәм тормош өçтөнлөктәрен билдәләү мөмкинлеге;

д) ваҡытты дөрөç бүлеү, иғтибарҙы иң яҡшы һөҙөмтәгә килтереүсе эштәргә генә йүнәлтеү (тормошта 80 процент уңыш 20 процент эшмәкәрлеккә бәйле, шуға күрә иң мөһим эште тәүге урынға ҡуйыу кәрәк).

Тормош мәғәнәһе формулаһы -нимә өсөн йәшәүегеҙҙе һөйләгән бер нисә абзац йәки бит. Унда ғүмер ахырына килеп еткәндә өлгәшергә тейешле төп маҡсат булырға тейеш. Ул һеҙҙең өсөн принципиаль әһәмиәткә эйә ҡиммәттәрҙе һәм һеҙ эйә булырға тейешле сифаттарҙы үҙ эсенә ала.

Үҙегеҙ өсөн шундай формула төҙөгөҙ һәм билдәләгән маҡсатығыҙға өлгәшеү теләген тоҡандырығыҙ. Бөгөндән башлап һеҙ һәр көн ысын ҡеүәтегеҙ йәшеренгән, йәшәү көсө биргән инештең һыуын эсергә тейешһегеҙ. Бөгөн - тап һеҙ икенсе кешегә әүерелә, ерҙең тартыу көсөнөң ҡоло булыуҙан азат ителеп, үҙегеҙҙең бәхетле тормошоғоҙҙоң ысын мөмкинлектәрен тикшерә башлай торған көн.

**Робин ШАРМА.**



## 15 ОКТЯБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Женский журнал"
09.15 "Жить здорово!" (12+)
10.25 "Контрольная закупка"
10.55 "Модный приговор"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Время обедать!"
13.00 "Дешево и сердито" с Дарьей Донцовой"
